# АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘНЕҢ 99 ГҮЗӘЛ ИСЕМДӘРЕ
# (ДОҒА-И ИСМИ ӘҒЗ̧АМ)

"Дәгъвәт" нәшрияте

Баҫтырыу өсөн яуаплы: Илшат хәҙрәт Хафизи
Китапты Әҙелбаев Инсаф тәржемә итте

Күмәртәләп алыу өсөн 8-937-30-33-734; 8-903-311-80-53 телефондарына мөрәжәғәт итергә.

Интернет аша: ilchat@mail.ru беҙҙең менән бәйләнешкә инергә була. www.dagvat.ru сайтынан беҙҙең китаптарыбыҙҙы бушлай күсереп алырға мөмкин.

Офсет ысулы менән баҫылды.  Тиражы 1000 дана (Инша Аллаһ!!!)

**"Әсмәә-үл-Хүснәә" — Күркәм исемдәр.**

Ҡөрьән Кәримдә:

**"Иң гүзәл исемдәр Аллаһтыҡы, Уға ғына хастыр. Аллаһҡа был исемдәр менән доға ҡылығыҙ"**,— тип бойоролған. ("Әғраф" сүрәһе, аят 180)

Тирмиҙи риүәйәт иткән бер хәҙистә Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

**إِنَّ لِلَّهِ تِسْعَةً وَتِسْعِينَ اِسْمًا مِائَةً غَيْرَ وَاحِدٍ وَمَنْ أَحْصَاهَا دَخَلَ الْجَنَّةَ**

***"Аллаһтың 99 исеме бар. Ул исемдәрҙе һанаған кеше йәннәткә инәсәк"*** — тип әйткән. Бы исемдәрҙе һанауҙың маҡсаты уларҙы ятлау йәки уҡыуҙан ғибәрәт. Доға урынына уҡылғанда бөйөк Яратыусынан теләнәсәк нәмәләр был хөрмәтле исемдәр менән һорала.

**هُوَ اللَّهُ الَّذِي لَآ إِلَهَ إِلَّا هُوَ الرَّحْمَانُ الرَّحِيمُ الْمَلِكُ الْقُدُّوسُ السَّلَامُ الْمُؤْمِنُ الْمُهَيْمِنُ الْعَزِيزُ الْجَبَّارُ الْمُتَكَبِّرُ الْخَالِقُ الْبَارِئُ الْمُصَوِّرُ الْغَفَّارُ الْقَهَّارُ الْوَهَّابُ الرَّزَّاقُ الْفَتَّاحُ الْعَلِيمُ الْقَابِضُ الْبَاسِطُ الْخَافِضُ الرَّافِعُ الْمُعِزُّ الْمُذِلُّ السَّمِيعُ الْبَصِيرُ الْحَكَمُ الْعَدْلُ اللَّطِيفُ الْخَبِيرُ الْحَلِيمُ الْعَظِيمُ الْغَفُورُ الشَّكُورُ العَلِيُّ الْكَبِيرُ الْحَفِيظُ الْمُقِيتُ الْحَسِيبُ الْجَلِيلُ الْكَرِيمُ الرَّقِيبُ الْمُجِيبُ الْوَاسِعُ الْحَكِيمُ الْوَدُودُ الْمَجِيدُ الْبَاعِثُ الشَّهِيدُ الْحَقُّ الْوَكِيلُ الْقَوِيُّ الْمَتِينُ الْوَلِيُّ الْحَمِيدُ الْمُحْصِي الْمُبْدِئُ الْمُعِيدُ الْمُحْيِي الْمُمِيتُ الْحَيُّ الْقَيُّومُ الْوَاجِدُ الْمَاجِدُ الْوَاحِدُ الْأَحَدُ الصَّمَدُ الْقَادِرُ الْمُقْتَدِرُ الْمُقَدِّمُ الْمُؤَخِّرُ الْأَوَّلُ الْآخِرُ الظَّاهِرُ الْبَاطِنُ الْوَالِى الْمُتَعَالِي الْبَرُّ التَّوَّابُ الْمُنْتَقِمُ الْعَفُوُّ الرَّؤُفُ مَالِكُ الْمُلْكِ ذُو الْجَلَالِ وَالْإِكْرَامِ الْمُقْسِطُ الْجَامِعُ الْغَنِيُّ الْمُغْنِي الْمَانِعُ الضَّارُّ النَّافِعُ النُّورُ الْهَادِى الْبَدِيعُ الْبَاقِى الْوَارِثُ الرَّشِيدُ الصَّبُورُ .**

***"Һүәллааһүлләҙии ләә иләәһә илләә һүәәр-Рахмәәнүр-Рахиимүл-Мәликүл-Ҡуддүүсүс-Сәләәмүл-Мүъминүл-Мүһәйминүл-Ғәзиизүл-Жәббәәрүл-Мүтәкәббирүл-Хаалиҡул-***

***Бәриʾүл-Мусаууирул-Ғаффәрул-Ҡаһһәрул-Үәһһәбүр-Раззәҡул-Фәттәхүл-Ғәлиимүл-Ҡаабидул-Бәситул-Хаафидур-Раафиғул-Мүғиззүл-Мүҙиллүс-Сәмииғул-Бәсыырул-Хәкәмүл-Ғәдлүл-Ләтыыфүл-Хабиирул-Хәлиимүл-Ғәҙыымүл-Ғафууруш-Шәкүүрул-Ғәлиййүл-Кәбиирул-Хәфииҙул-Муҡытүл-Хәсиибүл-Джәлиилүл-Кәриимүр-Раҡыбүл-Мүжиибүл-Үәәсиғүл-Хәкиимүл-Үәдүүдүл-Мәжиидүл-Бәәғиҫүш-Шәһиидүл-Хәҡҡул-Үәкиилүл-Ҡауийүл-Мәтиинүл-Үәлиййүл-Хәмиидүл-Мухсыл-Мүбдиʾүл-Мүхйил-Мүмиитүл-Хәййүл-Ҡаййүүмүл-Үәәжидүл-Мәәжидүл-Үәәхидүл-Әхәдүс-Самәдүл-Ҡаадирул-Мүҡтәдирүл-Мүҡаддимүл-Мүәххырул-Әүүәлүл-Әәхыруҙ-Ҙааһирул-Бәәтынүл-Үәәлиийүл-Мүтәғәәлийүл-Бәррут-Тәүүәәбүл-Мүнтәҡымүл-Ғәфүвүр-Рауүфү Мәәликүл-Мүлки Ҙүл-жәләәли үәл-Икраам әл-Мүҡситул-Жәәмиғул-Ғанийүл-Мүғнии әл-Мәәниғуд-Дааррун-Нәәфиғун-Нуурул-Һәәдии әл-Бәдииғул-Бәәҡыйүл-Үәәриҫүр-Рашиидүс-Сабүүр".***

Бында Аллаһтың гүзәл исемдәренең ҡыҫҡа ғына аңлатмаларын биреүҙе файҙалы тип таптыҡ.

**اللهُ — Аллаһ.**

(1сүрә:1 аят), (2:7, 8, 9, 10, 15, 17, 19, 20, 22, 23, 26, 27, 28), (3:18), (5:109), (20:14), (20:18,19, 22, 23, 24) һ.б.

***Раббыбыҙҙың иң бөйөк һәм дәрәжәле, шул уҡ ваҡытта Уның илаһилығына ишара итеүсе исемдәренең береһе.***

Әлеге исемде көн һайын мең мәртәбә ҡабатлағандарҙың күңелдәренән, йөрәктәренән шик-шөбһә, ҡыйыуһыҙлыҡ китер. Дауа табылмаған сирҙәрҙе һауыҡтырыуҙа ла «Аллаһ» һүҙенең шифа көсө ҙур. Бының өсөн уны ҡабатлап, күп тапҡыр доға ҡылырға кәрәк.

Аллаһтың 99 исеменең иң беренсеһе. Был исем бөйөк Аллаһтың башка исемдәренән айырмалы. Сөнки башка исемдәренең һәр береһе аңлаткан мәғәнәләрҙе бер һүҙ үҙе генә лә асыклай. Был исем шул ук вакытта "Исме Әғҙам"дыр. Аллаһтың башка исемдәре айырым-айырым бер мәғәнәне аңлаткан дәлил булыр, был исем бөтөн сифаттарын берләштерә. Аллаһтың, мәҫәлән, "Ғалим" сифаты Унын бары тик ғилемен, "Рахим" сифаты мәрхәмәтен белдерә. Ләкин Аллаһ исеме Унын 99 исеме белдергән барлык мәғәнәләрҙе лә эсенә алған. Кешенең Аллаһты башка исемдәренең мәғәнәһе менән дә асыклауы мөмкин. Ул ысынында ла шулай. Кол, ғалим булырға мөмкин, мәрхәмәтле була алыр, сабыр булырға мөмкин. Аллаһ ғалимдыр, мәрхәмәтле, сабырҙыр. Ләкин Унын был сифаттарҙы йөрөтөүе менән бәндәнең дә ошо сифаттарҙы йөрөтөүе араһында ҙур айырма бар. Аллаһ һүҙенең шундай бер үҙенсәлеге бар: Аллаһ менән берәү ҙә Уны уртаклаша алмай, икенсе төрлө әйткәндә, Аллаһтан башкаға был исемдең бер кемгә лә бирелеүе мөмкин түгел. Шунын өсөн дә Көръән Кәрим Унын исеме менән башлана. Аллаһтың барлығын белеп, берлегенә инанып, кешенең эшләргә тейешле эше — Унын ише һәм уртағынын булмауына ышанып, ғибәҙәт кылынырлык берҙән-бер Мәғбүдтең (коллок кылынырға тейеш булған зат) Ул булыуын белеү, кәлбен Уға мөхәббәт менән һуғарыу. Был яратыу, башка һөйөүҙәрҙән айырмалы буларак, башка бер һөйөү, Унан бер аҙ к уркыу һәм һыйыныуҙыр.

Мосолман бары тик Уға ғына ғибәҙәт итергә һәм Унан ғына ярҙам һорарға, Унын ғына ризалығын алыр өсөн тырышырға тейеш. Быны үҙенең рухында тойған һәм үҙенең әҙәбе итеп к абул иткән мосолман үрнәк инсан дәрәжәһенә күтәрелер.

**الرَّحْمَانُ — әр-Рахмәән, الرَّحِيمُ — әр-Рахиим.**

(1:3), (2:163), )13:30), (17:110), (19:18,19, 26, 44, 45, 58, 61, 69, 75, 76, 85, 87, 88, 91, 92, 93, 98), (20:5, 90, 108, 109), (21:26, 36, 42, 112), (25:26, 59, 60) һ.б.

***Рәхимле, Шәфҡәтле.***

Аллаһтың был исемен йыш, йәғни һәр намаҙҙан һуң йөҙ мәртәбә укыу хәтерҙе яҡшырта, иғтибарҙы арттыра, күңелде сафландыра, насар сифаттарҙан арындыра.

(1:3), (2:37, 54, 120, 160, 163), (3:31), (4:100), (5:3, 98), (9:104, 118), (10:107), (11:41), (12:53, 64, 98), (15:49), (26:9, 104, 122, 140, 159, 191,217), (27:30) һ.б.

***Рәхимле, Үҙенә ышанғандарға, Үҙенә бойһонғандарға шәфҡ әт күрһәтеүсе.***

Рахмән һәм Рахим һүҙҙәре рәхмәт тамырынан барлыкка килгән. Уның ҡыҙғаныу мәғәнәһе лә бар. Бөйөк Аллаһ яратҡан барлыҡтарын кеше шәхесен ҡыҙғаныу, йәлләү һәләттәренән сығып ҡыҙғаныр, мәрхәмәт

ҡылыр. Уның был сифатын кешеләргә йүнәлдергәндә мөъмин менән кафыр араһында айырма юҡтыр. Ул Рахмән исеме менән был донъяла һәр кемгә мәрхәмәтле булыр. Әхирәттә Рахим исеме менән бары тик мөъминдәргә генә мәрхәмәт итәсәк.

Әлеге исемде һәр намаҙҙан һуң йөҙ мәртәбә

ҡабатлаған кешенән ҡайғы-хәсрәт йырак торор.

**الْمَلِكُ — әл-Мәлик.**

(20:114), (23:116), (59:23), (62:1), (114:2)

***Батшаларҙың Батшаһы, Хөкөмдар.***

Был исем Аллаһтың бөтөн ғәләмгә хужа булыуын, уның мәлиге — Хөкөмдары булыуын аңлата. Кешеләр араһында мәликтәр, солтандар бар. Уларҙың тормоштары бер ҡасан да имен булмаған, һәр ваҡыт бер боролош йәки ғисъян (тыңламау)

менән юк булырға хөкөм ителгәндәр. Аллаһы Тәғәлә хаҡиҡый Мәлик (Батша), хаҡиҡый Солтандыр (ысын Хөкөмсе). Золомлоҡ ҡылмаҫ, мәрхәмәт итер. Һәр ваҡыт ҡолдарының яҡшылығын теләр. Бәлки ҡайһы осраҡта кешеләр быны тураһында аңлап та бөтмәҫтәр.

Аллаһы Тәғәләнең бер кемгә лә, бер нәмәгә лә ихтыяжы юҡ. Ул яраткан, бар иткән һәр нәмә, һәр кем иһә Уға мохтаж. Әлеге гүзәл исемде зәүәлдән һуң (төштән һуң) күп тапкыр укыған кеше фәкирлектән ҡотолор.

**الْقُدُّوسُ — әл-Ҡуддүүс.**

(59:23), (62:1)

***Изге, Кәмселекһеҙ.***

Аллаһы Сүбхәнә үә Тәғәлә мәхлүҡәткә (бөтөн яратылған нәмәләргә) оҡшауҙан пактыр, йыраҡтыр. Әҙәм балаһы камиллыҡ ҡа ирешеү өсөн көс һәм ғәйрәт сарыф итә, ләкин барыбер бер ваҡ ытта ла тулы камиллыкҡа ирешә алмаҫ. Аллаһ — Раббыбыҙ кешеләр камиллыҡ тип уйлаған бер төркөм сифаттарҙан пактыр. Кеше Аллаһтың был исеменән өлөшөн алырға тейеш, камиллыҡ ҡа етешеү өсөн был юлда бөтөн көсөн файҙаланырға һәм сарыф итергә тейеш.

Был исемде йыш ҡабатлағандарҙы Аллаһы Тәғәлә психик ауырыуҙарҙан һауыктырыр. Күңелдә ҡурҡыу хисе булғанда, уны көн һайын 100 мәртәбә укырға кәрәк.

**السَّلَامُ — әс-Сәләәм.**

(59:23)

***Йыһанды яратыусы.***

Заты етешһеҙлек һәм ғәйептәрҙән, насар эштәрҙән, кәмселекле ғәмәлдәрҙән сәләмәт булған, халыкка сәләмәтлек биреүселер. Йәннәттә, йәннәтлеләргә иҫәнлек һәм именлек биреп, уларҙы куркыуҙан һаклаусы тигән мәғәнәһе лә бар. Аллаһтың ғәмәлдәре, хәрәкәт һәм эштәре насарлыктарҙан сәләмәттер, йырактыр. Аллаһ бер вакытта ла яуызлыкты теләмәҫ

.

Кеше, күңелендә насар теләк һәм эшләргә ни кәҙәр

аҙ урын бирһә, Аллаһтың был исеменән шул кәҙәр

үҙенә өлөшөн алған тимәктер.

«Әс-Сәләм»де күп мәртәбә кабатлаған кешене Аллаһ бәхетһеҙлектәрҙән һаклай. Ә әлеге исемде 115 (160) тапкыр укып, ауырыуға өрһәң, ул тиҙерәк һауығыр, иншә Аллаһ.

**اَلْمُؤْمِنُ — әл-Мүъмин.**

(53:23)

***Ышанысла, һәр төрлө бәләләрҙән Һаклаусы.***

Колдарына именлек һәм тыныслык биреүсе, иман шәрәфе менән шәрәфләндергән Барлык тимәктер. Аллаһ бөтөн именлек һәм тыныслыктың берҙән-бер сығанағы. Кеше зәғиф тәбиғәтле булып яратылған, бөтөн нәмәнән куркыр. Аслык, зилзилә (ер тетрәү), бәлә-каза һәм башкаларҙан бары тик Аллаһка инанған кеше генә куркмаҫ. Ул үҙен яраткан бөйөк Барлыктың уны хужаһыҙ, бер үҙен калдырмаҫына ышаныр.

Сөнки Уның бер исеме "әл-Мүъмин"дер — яраткан мәхлүк этkә именлек һәм тыныслык бирәсәк.

Нимәнән булһа ла куркканда әлеге исемде 630 мәртәбә к абатларға кәрәк. Аллаһы Тәғәләнең көҙрәте сикһеҙ - шик-

шөбһәләрегеҙҙе таратыр. Уны шулай уҡ төрлө ҡурҡыныс хәлдәр ҙән һаҡланыу өсөн дә уҡыйҙар.

**الْمُهَيْمِنُ — әл-Мүһәймин.**
(59:23)

***Һаҡлаусы, Үҙе яратҡан йән эйәләренең яҙмышын билгеләүсе.***

Ғәләмдәге һәр бөртөктө һәр мәхлүкте ғәмәлдәре, әжәлдәре, ризыҡтары менән белгән, уларҙы күҙәтеп торған, ҡолдарын һаҡ лаусы. Был сифаттар, һис шикһеҙ камил дәрәжәлә фәҡәт Аллаһы Тәғәләлә генә табылыр.

Ғөсөл ҡойоноп, ике рәкәғәт намаҙ уҡығандан һуң, әлеге исемде 100 мәртәбә ҡабатлағандарҙы Аллаһ рухи һәм физик яҡтан сафландыра. Ә уны көн һайын 115 мәртәбә ҡабатлаған кешегә Ү ҙенең мөғжизәләрен индерә.

**الْعَزِيزُ — әл-Ғәзииз.**
(9:17), (48:7) (4:158), (3:6), (9:40).

***Бөйөк, Ҡөҙрәтле, еңелмәҫ.***

Һәр нәмәне еңеүсе, теләгәнен эшләүҙә һис кем ҡаршы тора алмаусы берҙән-бер Барлыҡ. Ниндәй ҙә булһа бер барлыҡтың ғәзиз булыуы өсөн үҙендә бер төркөм үҙенсәлектәренең булыуы кәрәк. Тиңдәше аҙ булған, үҙенә күп ихтыяж талап иткән, һәм дә уның дәрәжәһенә ирешергә мөмкин булмаған был үҙ енсәлектәренең ҡайһы берҙәре кешеләрҙә лә табылыр. Ләкин улар сикләнгән күләмдә генә булыр. Аллаһтың ғәзиз булыуы улар менән сағыштырылмаҫ. Ул һәр ҡараштан берҙән-бер һәм үҙ енә булған ихтыяжы сикһеҙ. Унһыҙ һис бер нәмә лә булмаҫ.

Аллаһ был исемде 40 көн дауамында һәр көн 40-ар мәртәбә уҡ ығандарҙың дәрәжәһен күтәрә һәм һәр төрлө бәләләрҙән һаҡлай.

Уны иртәнге намаҙҙан һуң ҡабатлаған кеше Хоҙай рәхмәте менән бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйәсәк.

**اَلْجَبَّارُ — әл-Жәббәәр.**
(59:23)

***Ҡөҙрәтле, Үҙе халиҡ ҡылған (барлыҡҡа килтергән) һәр нәмәне, бар йән эйәләрен үҙ ихтыярына Бойһондороусы.***

Аллаһтың был исеме йәбер итеү тамырынан килә. Кәмселектәрен бөтөргән, мәжбүри юл менән хөкөмөн тормошҡа ашырған тип әйтеү була. Ул һәр нәмәне үҙ хөкөмөнән кисерер. Ғәләмдең тәртибе Ул ҡуйған

ҡанундар буйынса барыр. Ер йөҙөнөң һәр нөктәһендә Уның әмере йөрөр. Ул был сифаты менән кешеләрҙең кәмселектәрен бөтөрөр, етешмәгәндәрен төҙәтер һәм мәнфәғәттәрен хәл итер.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен иртә-кис 226-шар мәртәбә ҡабатлаған кеше яуызлыҡтарҙан, төрлө түбәнһетеүҙәрҙән азат булыр, инша Аллаһ. Ундайҙарға ирекһеҙләүҙәр, ауырлыҡтар, бәхетһеҙлектәр ҙә янамай.

**اَلْمُتَكَبِّرُ — әл-Мүтәкәббир.**
(59:23)

***Ғорур, Олуғтарҙың Олуғы, Бөйөктәрҙең Бөйөгө.***

Аллаһ ололоҡ, бөйөклөк һәм юғарылыҡ эйәһе. Был исем Уға ғына хас. Йәғни Аллаһтан башҡа бер кемгә лә мөтәкәббир тейелмәҫ. Сөнки әҙәм балаһының ғорурланырлыҡ, тәкәббер булырлыҡ бер нәмәһе лә юҡ. Малына-мөлкәтенә ышанһа, бер көн улар ҙа ҡулынан китер. Дәрәжәле урынына, көсөнә, туғандары һәм тарафтарына ышанһа, таянһа — бер көн улар ҙа уны ҡалдырырҙар. Ғилеменә таянып тәкәбберләнһә, был ғилемде бер кем дә унан ала алмаҫ, әммә ғилем менән тәкәбберләнеү

була алмай торған нәмәләрҙер. Белемдең дә ҡулдан китеүе мөмкин. Ауырып китеп, бөтөн ғилемең онотолорға мөмкин. Тимәк, кешенең тәкәбберләнергә һис хаҡы юҡ. Был исем ысынында бер Аллаһҡа ғына бирелергә мөмкин.

Әлеге исемде йыш телгә алғандар маҡтауға һәм хөрмәткә лайыҡ булырҙар. Ә берәй эш башлар алдынан уҡыһаң, ахыры уңышлы тамамланыр. Балаға уҙырға теләгән ир ҡатынына ла «Әл-Мүтәкәббир» тип ҡабатларға кәңәш итәләр. Ундайҙар донъяға изге бала килтерерҙәр.

**الْخَالِقُ — әл-Хаалиҡ.**

(59:24), (6:102), (13:16), (39:62), (40:62)

***Бар ҡылыусы, күсергес алмайынса Ижад итеүсе һәм Үҙе яратҡан йән эйәләренең яҙмышын Билгеләүсе.***

Ғәләмдәге бөтөн нәмәне юҡтан бар иткән тимәктер. Бөгөн инде фәнни яҡтан да Ғәләмдең һуң яратылыуы раҫланды. Ғәләмдең яратылыуында мәхлүҡәттең бер ҙә ҡатнашы юҡ. Уны бары тик Аллаһы Тәғәлә бер Үҙе генә яратҡан. Аллаһтың ғәләмде нисә көндә яратыуы тураһында Ҡөрьәндә ҡайһы бер мәғлүмәттәр килтерелһә лә, кешенең бөгөнгө ҡәҙәр ирешкән белем дәрәжәһе быны аңлай алырлыҡ түгел әле. Аллаһы Тәғәлә был сифатын кешеләргә бик аҙ бүләк иткән. Ғилем эйәләре, шунан файҙаланып, ҡайһы бер фәнни асыштар, ижади уңыштар яһайҙар.

7 көн буйына йөҙәр мәртәбә әлеге гүзәл исемде ҡабатлағандарҙ ы Аллаһы Тәғәлә бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай. Төнгө сәғәттәрҙә «әл-Хаалик» тип әйтеүҙе ғәҙәткә керетҡән кешегә Аллаһы Үҙенең һа ҡсы фәрештәһен ебәрә.

**الْبَارِئُ — әл-Бәәри.**
59:24)

***Һәр нәмәне Үҙ ҡөҙрәте менән Булдырыусы, бының өсөн Уға бер ниндәй ҙә көс ҡуйырға кәрәкмәй. Ул: «Бул!» -тигән нәмә тормошҡа аша***

Алдағы исем кеүек быныһы ла Яратыусы тимәктер, ләкин мәғәнәләре тап килә тип әйтеп булмай. "Хаалиҡ" исеме бөтөн бер яратыуҙы аңлата. Был исем иһә яратылғандар араһында бер тәртип, эҙлеклелек булыуын күрһәтә. Был исем ғәләмде ошо тәртип һәм гүзәллек эсендә яратыусының Аллаһ булыуын раҫ лай.

Йөккә уҙа алмаған ҡатын-ҡыҙ, 7 көн ураҙа тотоп, һәр көн ифтарҙан һуң «әл-Хаалиҡ, әл-Бәәри, әл-Мусаууир» тип 21 мәртәбә ҡабатлап, һыулы һауытҡа өрһә һәм шуның менән ифтар ҙы башлаһа, Аллаһ уға бала бүләк итер.

**الْمُصَوِّرُ — әл-Мүсаууир.**
(59:24)

***Яралтыусы, һәр бер йән эйәһен ҡабатланмаҫ йөҙ-ҡиәфәт менән Бар итеүсе.***

Бынан алдағы ике исем кеүек был да Яратыусы тимәктер. Әммә былар синоним түгел. "Мүсаууир" яраткан һәр барлыкка айырым бер үҙенсәлек, бер һүрәт биргән Яратыусы тимәктер. Ер йөҙөндә миллиардлаған кеше бар, тик һәр береһенең бармаҡ эҙҙ әре, тауыштары бер-береһенән айырылып тора. Быларҙың барыһын да Яратыусы — Бөйөк Аллаһтыр. Әл-Мүсаууир исеме шуны аңлата.

**الْغَفَّارُ — әл-Ғаффәәр.**
(20:82), (38:66), (39:5), (40:42), (71:10)

***Кисереүсе, берҙән-бер Ярлыҡаусы. Ул, ҡылған ғәмәлдәре өсөн тәүбәгә килеп, Үҙенә мөрәжәғәт итеүселәрҙең тәүбәләрен ҡабул ҡылырға вәғәҙә бирҙе.***

Был һүҙҙең тамырында йәшереүсе мәғәнәһе бар. Йәғни Аллаһ бик йәшергән тимәктер.

Аллаһ кешеләр тарафынан күрелеп беленергә тейешле булмаған нәмәләрҙе йәшерер. Әлбиттә, был беренсе сиратта гонаһтарға ҡарай. Әгәр был донъяла эшләнелгән һәр гонаһ Әхирәттә фаш ителһә, беҙҙең ундағы хәлебеҙҙе аңлатырлыҡ һүҙ ҙәр табылмаç ине. Бөйөк Аллаһ был исеме менән ҡолдарының гонаһтарын йәшерер, йәғни ғәфү итер.

Кем дә кем әлеге исемде йома намаҙынан һуң 100 мәртәбә ҡабатлай, шул Аллаһтың ярлыҡауына өмөт итә ала. Тәүбәгә килгәндә лә әлеге исемде күп мәртәбәләр ҡабатларға кәрәк. Ғаср (икенде) намаҙынан һуң көн һайын «Йә Ғаффәру ғфирли» тип ҡабатлаған кеше иһә Аллаһ тарафынан ғәфү ителгәндәрҙән һанала.

**اَلْقَابِضُ — әл-Ҡаабид, اَلْبَاسِطُ — әл-Бәәсит.**

Аллаһы Тәғәләнең был ике исеме бергә иçкә алынганда уларҙ ың мәғәнәләре бер аҙ еңелерәк аңлашылыр. Сөнки һәр ике исем дә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған мәғәнәләрҙе аңлата.

Әл-Ҡаабид — тарайтҡан, ҡыçҡан тимәктер. Аллаһ теләгән ваҡ ытында ҡолона биргән ниғмәттәрен кире алыр, балаларының сәләмәтлеген алыр. Шул рәүешле, инсанды тарайтыр, ҡыçыр.

Әл-Бәәсит исеме иһә асыусы һәм киңәйтеүсе мәғәнәһендә ҡ улланыла. Аллаһы Тәғәлә теләгән ҡолона күп итеп ниғмәт-ризыҡ тар бүләк итер, күңел тыныслығы бирер, иçәнлек һәм сәләмәтлек

бүләк итер. Был әлеге исемдең сағылышы. Әлбиттә, быларҙың барыһының да бер сәбәбе, бер хикмәте бар.

**الْخَافِضُ — әл-Хаафид, الرَّافِعُ — әр-Раафиғ.**

Бөйөк Аллаһтың бер-береһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә булған ике исеме бар. Әл-Хаафид юғарынан аҫҡа төшөргән, түбәнәйткән тимәктер. Бөйөк Аллаһ ҡайһы бер ҡолдарын үҙҙ әренең юғары урын һәм дәрәжәләренән төшөрөр. Дан һәм шәрәф, ихтирам эйәһен оят һәм рисуай итә алыр. Әҙәм балаһына шундай бер бәлә килер, уның иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә урынын ташлап ҡасыуҙан башҡа сараһы ҡалмаҫ. Был хәләт Аллаһты танымаған тәкәббер һәм маҡтансыҡтарға хас булыр.

Әр-Раафиғ исеме иһә, күтәреүсе, ололаусы тимәктер. Аллаһ теләгән ҡолдарына ҡайсаҡ көтмәгәндә хөрмәт ишектәрен асыр. Күңелен иман нуры менән яҡтыртыр. Былдай инсандар һәр ваҡ ыт Аллаһтың ризалығын яулар өсөн, хаҡ үә хәҡиҡәт өсөн тырышырҙар.

**الْمُعِزُّ — әл-Мүғыйзз, الْمُذِلُّ — әл-Мүҙилл.**

Юғарылағы кеүек былар ҙа ҡапма-ҡаршы мәғәнәләге исемдәр. Беренсеһе ғиззәт, шәрәф, хөрмәт биреүсе һәм ғәзиз, ҡәҙерле ҡ ылыусы тимәктер.

Аллаһы Тәғәлә, теләгән ҡолона төрлө-төрлө ниғмәттәр биреп, уны ғәзиз итер. Аллаһтың ғәзиз иткән кешеһе иһә, йәмғиәттә һәр яғы менән үрнәк булыр. Ул эйә булған урын, вазифа, уның тырышлығы нәтижәһендә кешеләр менән булған мөнәсәбәттәрендә үҙгәреүсән булмаҫ.

Икенсе исем иһә ауыр хәлгә төшөрөр, хур һәм хәсрәтле итер. Аллаһ һис бер сәбәпһеҙ ҡолон ҡайғы-хәсрәткә төшөрмәҫ. Уның, һис шикһеҙ, бер сәбәбе, бер хикмәте бар.

**السَّمِيعُ — әс-Сәмииғ.**

***Һәр нәмәне ишетеүсе һәм тыйыусы.***

Кешеләр ҙә ишетәләр. Ләкин инсандарҙың ишетеүе сикле, Аллаһтың ишетеүе иһә сикһеҙ. Ул инсандар кеүек, ишетеү ағзалары аша түгел, ағзаһыҙ, сараһыҙ ишетә. Ишетмәй калған бер нәмәһе лә булмаҫ. Хатта ул ишетеп кенә ҡалмаҫ, бәлки ишетеүҙән дә уҙып, кешеләрҙең нимә уйлауҙарын да белер.

Аллаһтың был исеменән өлөштәрен алған кешеләр ҡолаҡ тарын үә күңелдәрен һәр ваҡыт хәйерле һәм гүзәл нәмәләрҙе ишетеү өсөн асырҙар.

**الْقَهَّارُ — әл-Ҡаһһәәр.**

(13:16), (14:48), (38:65), (39:4), (40:16)

***Хаким, Ул яратҡан йән эйәләренең барыһы ла Уға ғына бойһона.***

Ҡәһер тамырынан барлыкка килгән был һүҙ "кәһәр һукһын, к әһәр төшкөрө" кеүек ғибәрәләр рәүешендә телебеҙгә кереп к алған. Юҡ итеүсе, һәләк итеүсе тимәктер.

Аллаһ теләгән ваҡытта ғәләмдәге бөтөн яраткандарын шул ук ваҡытта юк итә ала. Теләһә, тәүбә итмәгән гонаһтарҙы ла юҡ итә ала. Тарихтың төрлө дәүерҙәрендә йәшәгән төрлө-төрлө милләттәр тураһында ла хәбәребеҙ бар. Әгәр Аллаһ, был исемдәрҙәге мәғәнәне йыш ҡулланһа, ер йөҙөндә бик аҙ кеше ҡ алыр ине. Ләкин Ул Рахим исеме менән мәрхәмәт итәлер.

Фани донъяны, ундағы ләззәттәрҙе өҫтөн күргән кешегә әлеге исемде күп мәртәбәләр ҡабатларға кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, шул ваҡытта йөрәгенә иман нуры инер, гонаһ ҡылыуҙан һаҡ ланыр.

**الْوَهَّابُ — әл-Үәһһәәб.**

(3:8), (38:9), 38:35)

***Бүләк итеүсе, Игелектәргә бай.***

Ҡолдарына каршылыкһыҙ буларак һанап бөтөрмәслек дауамһыҙ күп ниғмәттәр биреүсе тимәктер. "Биреү" ғәмәле беҙҙә, йәғни кешеләрҙә лә бар. Әммә беҙ биргәндәребеҙҙән һәр вакыт нindәй ҙә булһа файҙа көтәбеҙ, йәғни беҙгә бирергә тейештәр тип уйлайбыҙ. Аллаһ беҙҙән бер нәмә лә көтмәҫ. Уның колдарына мохтажлығы юҡ. Ул уларҙан бер нәмә лә көтмәй. Уның бөтөн теләгәне — колдарының дөрөҫ итеп ғибәҙәт кылыуҙары һәм бәхетле булыуҙарылыр.

Матди яктан кыйынлыктар кисергән кешегә әлеге гүзәл исемде көн һайын йәки духә намаҙын укыған вакытта һуңғы сәждәгә киткәндә 40 мәртәбә кабатларға кәрәк. Шулай итһә, иншә Аллаһ, фәкирлектән котолор, мал-мөлкәте артыр.

Ҡылған доғалар Аллаһка барып ирешһен өсөн, был исемде доғанан һуң 7 мәртәбә йәки мәсет, йорт ишеге алдында, өс тапкыр сәждәгә китеп, һуңынан кулдарҙы доға кылғандағы кеүек итеп күтәреп, 100 мәртәбә кабатларға кәңәш ителә.

Ә үҙен тәьмин итә алмаусы йәки әсирлектәге кеше 3, 7 төн дауамында төнгө өҫтәмә намаҙҙың ике рәкәғәтенән һуң «әл-Үәһһәб» тип 100 мәртәбә кабатлаһа, Аллаһы Тәғәлә уны кисереп, ауыр хәленән коткарыр.

***Игътибар:*** *духә намаҙы күп кенә хәҙистәрҙә телгә алына. Унда рәкәғәттәр һаны икенән ун икегә тиклем. Иң яҡшыһы айырым-айырым икешәр рәкәғәт үтәү. Беренсе рәкәғәттә «Әл-Фәтиха» сүрәһенән һуң «Әл-Кәфирун»ды (109-нсы сүрә) йәки «әш-Шәмс»те (91-нсе сүрә), ә икенсе рәкәғәттә «Әл-Ислах»ты (112-нсе сүрә) йәки «Духә»не (93-нсе сүрә) укырға кәрәк. Духә*

*намаҙы ҡояш тамам сығып, көндөң төшкә тиклемге (4 өлөшө у ҙғас башлана) һәм төшкә кәҙәр дауам итә.*

***Хәҙистәрҙән өҙөктәр:*** *Аллаһ духә намаҙын даими уҡығандар ҙың гонаһтарын ярлыҡар. Был намаҙҙы ике рәкәғәт итеп уҡ ығандар иһә ялҡаулыҡта ғәйепләнмәҫтәр, дүрт рәкәғәт итеп башҡарғандар Аллаһҡа инаныусыларҙан һаналырҙар, алты рәкәғәт күңелдәргә тыныслыҡ индерер, һигеҙ рәкәғәт тәҡүәлек бирер, ун ике рәкәғәт йәннәттә алтын һарайлы итер. (Быларҙы Ибн Мәждәһ риүәйәт итте.)*

*Ғәйшә (Аллаһ унан риза булһын) әлеге намаҙҙың мөһимлегенә баҫым яһап: «Мәрхүм-мәрхүмә булған ата-әсәйем ҡәберҙән терелеп ҡайтһалар ҙа, духә намаҙын ташлап, уларҙы ҡаршы алырға сыҡмам», — тигән. Күреүегеҙсә, был һүҙҙәр әлеге намаҙ ҙың ни дәрәжәлә сауаплы булыуына тағын, бер дәлил булып тора.*

**الرَّزَّاقُ — әр-Раззәәк.**

(51:58)

***Игелек, Мәрхәмәт Ҡылыусы, Үҙе яратҡан йән эйәләренә шуларҙан өлөш Сығарыусы.***

Яратҡан барлыктарға ихтыяжы булған ризыктарҙы күп итеп биреүсе тимәктер. Ҡайҙа йәшәһә лә, Аллаһ үҙе яратҡандарға ризыктарын бирер. Әммә инсан, Раббым минең ризығымды бирә, тип көтмәҫкә, киреһенсә, эшләргә тейеш.

Кем дә кем иртәнге намаҙҙан һуң был гүзәл исемде уҡып, йорттоң дүрт мөйөшөнә йөҙәр мәртәбә өрә, Аллаһы Тәғәлә шуға игелек һәм мәрхәмәт күрһәтер, именлек бүләк итер. Ә «әр-Раззә к»ты даими ҡабатлаусылар мул, етеш тормошта йәшәрҙәр, иншә Аллаһ.

**الْفَتَّاحُ — әл-Фәттәәх.**
(34:26)

***Еңеүсе, йәшерен серҙәрҙе Белеүсе, ауырлыҡтарҙы еңеләйтеүсе, уларҙан Аралаусы. Ул тәҡүәлеләрҙең күңелдәренә иман нуры һала, Үҙенә килеү юлын ҡыҫҡарта.***

"Асыу" тамырынан яһалған был исемдең мәғәнәһе ҡолдарына бөтөн еңеллек ишектәрен асыусы, еңеләйтеүсе һәм ниғмәттәрен ҡолдарының алдына йәйеүсе тимәктер.

Быны Аллаһ ҡолдарына рәхмәт, ғилем һәм мәғрифәт ишектәрен асыр, тип аңлатҡан ғалимдар ҙа бар.

Аллаһы Тәғәлә иртәнге намаҙҙан һуң, ҡулдарын күкрәгенә ҡ уйып, әлеге гүзәл исемде 70 мәртәбә ҡабатлаған кешенең йөрәген иман нуры менән тултырыр. Уны даими ҡабатлаусы һәр ваҡыт һәр эштә еңеүсе булыр.

**الْعَلِيمُ — әл-Ғәлиим.**
(2:29), (2:115), (2:158), (3:92), (4:35), (24:41), (33:40), (35:38), (57:6)

***Бар нәмәнән Хәбәрҙар, Уға йәшерен ғәмәлдәр, уй-фекерҙәр, хыялдар билгеле. Ул өҫтәмә мәғлүмәткә мохтаж түгел, сөнки бар ғилем Уның Үҙенән, Ул — булған һәм буласаҡ ваҡ иғалар тураһында ла Белеп тороусы. Йән эйәләре өсөн ғәйре (бөтөнләй икенсе, билдәһеҙ) тәбиғи булмаған нәмәләр ҙә Уның өсөн яңылыҡ түгел.***

Һәр нәмәне белгән, белеүсе тимәктер. Уның белүенең сиге юҡ . Донъяның башынан аҙағына ҡәҙәр мәңгелек булған һәм буласа ҡ һәр нәмәне белер. Уның белеме кешеләрҙең белеме кеүек түгел, Ул асыҡ һәм йәшерен һәр нәмәне белер. Уның, ғилеме ғәләмдәге һәр нәмәне эсенә алған.

Кеше лә белем эйәһе. Ләкин кеше белеменең сикле булыуы билгеле нәмә. Кеше белемен арттырыу өсөн тырышырға тейеш. Ғилемен арттырған һайын, Аллаһы Тәғәләне тағын да яҡшыраҡ таныр һәм белер.

Әлеге гүзәл исемдә даими ҡабатлағандарға Аллаһы Тәғәлә ғилем ишектәрен асыр, зирәклек менән бүләкләр һәм йөрәктәрен иман нуры менән тултырыр, иншә Аллаһ. Уны бигерәк тә кискеһен уҡырға кәңәш ителә.

**الْبَصِيرُ — әл-Бәсыыйр.**

(3:15), (4:58), (17:1), (42:11), (42:27), (57:4), (67:19)

***Күпте Күреүсе, асыҡ һәм йәшерен булған нәмәләрҙе күреүсе.***

Кешеләрҙең һәм бөтөн мәхлүҡәттең хәл һәм хәрәкәттәрен ниндәй ҙә булһа сара ҡулланмайса күреүсе һәм күҙәтеүсе тимәктер. Уның күреүе өсөн яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ мөһим түгел. Ул һәр хәләттә һәм шартта күрә алыр.

Ҡол, Аллаһтың уның бөтөн хәрәкәт һәм ҡыланыштарын белеүе тураһында иҫтә тотоп, үҙен бер төрлө тәртиптә тоторға тейеш.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен йома намаҙынан һуң 100 мәртәбә ҡабатлаған кешенең күңеленә иман нуры инер, күҙ күреүе яҡшырыр. Йома намаҙына ҡәҙәр ҡабатлаһа, башкалар араһында дәрәжәһе үҫер.

**الْحَكَمُ — әл-Хәкәм.**

(6:52), (22:69)

***Иң олуғ Хөкөмдар, Зирәк аҡыл Эйәһе, Уның хөкөмө ғәҙел, ә ҡарарҙарының көсө бар.***

Хакты еренә еткереүсе, хөкөм итеүсе тимәктер. Бөйөк Аллаһ, һис шикһеҙ, хөкөм итеүселер. Ул донъяла көсөн ҡулланып, кешеләрҙе хөкөм иткәндәргә лә хөкөм сығарыр. Уның теләге һәр ерҙә һәм һәр ваҡытта үтәлер.

Аллаһы Тәғәлә әлеге гүзәл исемде, тәһәрәтләнеп, төндөң һуңғы өлөшөндә 99 мәртәбә ҡабатлаған кешенең йөрәген иман нуры менән тултырыр, иң йәшерен серҙәрен асыр. «Әл-Хәкәм»де бигерәк тә аҙна кистән йомаға ҡаршы төндә уҡырға кәңәш ителә.

**اَلْعَدْلُ — әл-Ғәдел.**

(6:92), (6:115)

***Ғәҙел, бер кемгә ҡарата ла ғәҙелһеҙлек ҡылмай һәм быны эшләүҙе башҡаларға ла тыя.***

Ғәҙеллек эйәһе тимәктер. Аллаһ залим түгел, ғәҙел, ғәҙел хөкөм итер. Кешеләр ҙә ғәҙеллек менән хөкөм итерҙәр, ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында һәр ваҡыт ғәҙеллекте тәьмин итмәҫ тәр. Аллаһ иһә һәр ваҡыт ғәҙел, тоғролор.

Ҡол, Аллаһтың был исеменән өлөшөн алып, бөтөн эштәрендә һәм кешеләр менән булған мөнәсәбәттәрендә ғәҙел булырға тырышырға тейеш.

Был гүзәл исемде егерме телем икмәккә (бармаҡ йәки сафрон менән) яҙып, аҙна кис көнөн йомаға ҡаршы төндә йәки йома көндө ашаған кешегә Аллаһы Тәғәлә яраткан бар йән эйәләре яр ҙам итәсәк. Ә уны 20 мәртәбә укығандарҙың ышанысл ы, ихлас күңелле, эскерһеҙ дуҫтары артыр.

**اَللَّطِيفُ — әл-Ләтыйф.**

(6:103), (22:63), (31:16), (64:14)

***Үҙ ҡолдарына ҡарата Мәрхәмәтле, Ул — уларҙың тормошон еңеләйтеүсе, матди һәм рухи яҡтан Тәьмин итеүсе, Ярлыҡаусы.***

Эштәрҙең бөтөн нескәлектәрен белеүсе, ҡолдарына бик күп сәбәп менән төрлө файҙалар биреүсе, уларға ҡарата якшы мөғәмәлә ҡылыусы тимәктер.

Әлеге гүзәл исемде көн һайын 133 мәртәбә ҡабатлағандарҙы Аллаһы Тәғәлә Үҙенең ризалығы менән бүләкләр, ундайҙарҙың хыялдары ла, киләсәккә билгеләгән маҡсат-ынтылыштары ла тормошка ашыр. Фәкирлектән, сир-сырхауҙарҙан арыныу, яңғыҙ лыктан ҡотолоу өсөн, Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сөннәте буйынса тәһәрәт алып, ике рәкәғәт намаҙ уҡырға һәм әлеге исемде 100 мәртәбә ҡабатларға кәрәк.

**الْخَبِيرُ — әл-Хабиир.**

(6:18), (17:30), )34:1), (35:14), (49:13), (59:18), (63:11)

***Бар нәмәнән Хәбәрҙар, асыҡ һәм йәшеренде, үткәнде һәм киләсәкте Белеүсе.***

Ғәләмдә булған һәм буласаҡ һәр нәмәнән хәбәрҙарҙыр. Уның, хәбәре булмаған бер өлкә лә юҡ. Аллаһ күңелебеҙҙән үткән яҡ шы һәм насар уйҙарҙы ла белә. Ләкин, быға ҡарамаҫтан, беҙҙе яуаплы итмәҫ.

Әлеге гүзәл исемде дүрт көн дауамында күп мәртәбәләр ҡ абатлаған кешегә Аллаһы Тәғәлә Үҙенең серҙәрен асыр. Бынан тыш уны даими ҡабатлау комһоҙ теләктәрҙән, насар ғәҙәттәрҙән ҡотолорға ярҙам итер.

**الْحَلِيمُ — әл-Хәлиим.**

(2:225), (2:235), (17:44), (22:59), (35:41), (64:17)

***Гонаһтарҙы Ярлыҡаусы, ғазаптарҙан Аралаусы.***

Аллаһ хилем эйәһелер. Ул был исеме менән ҡолдарын гонаһтары өсөн шунда уҡ язаламаҫ. Ҡайһы бер гонаһтарҙы ғәфү итер, ҡайһыларының язаһын Әхирәткә ҡалдырыр. Хилем эйәһе булыуҙа бер кем дә уның кеүек түгелдер.

Кем дә кем был гүзәл исемде ҡағыҙға яҙып, һыуҙа сылатк андан һуң, шул һыуҙы нимәгә лә булһа һибә икән, әлеге әйбер төрлө бәлә-ҡазаларҙан иҫән ҡаласаҡ. Ә инде баҡсаңдан йәки ҡыр ҙан бәрәкәтле мул уңыш йыйып алғың килһә, «әл-Хәлиим» тип я ҙылған ҡағыҙҙы сәсеү ваҡытында ергә күмеп ҡалдырырға кәрәк.

**الْعَظِيمُ — әл-Ғәҙыйм.**

(2:105), (2:255), (42:4), (56:96)

***Бөйөктәрҙең Бөйөгө.***

Аллаһ һәр нәмәнән бөйөктер. Хаҡиҡый бөйөклөк Уға ғына хастыр. Аллаһ Үҙенең бөйөклөгөн ҡолдары белеүен теләр. Беҙ Уның бөйөклөгөн ғәләмдәге төҙөклөккә ҡарап аңлай алабыҙ.

Әлеге гүзәл исемде йыш ҡабатлағандар башҡаларҙың ҡәҙер-хөрмәтенә лайыҡ булырҙар.

**الْغَفُورُ — әл-Ғафүүр.**

(2:173), (3:69), (16:110), (35:28), (41:32), (60:7)

***Ярлыҡаусы, ҡолдарының гонаһтарын кисереүсе.***

Аллаһ мәғфирәт эйәһелер. Кешенең гонаһы, ни ҡәҙәр күп булһа ла, Аллаһ уларҙы өҫкә сығармаҫ, йәшерер, ғәфү итер. "Ғаффәәр" исеме лә шул уҡ тамырҙандыр.

Әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлаған кеше баш ауыртыуға зарланмаҫ, һалҡын тейеп интекмәҫ, булған ҡайғы-хәсрәттәре, борсоуҙары китер, иншә Аллаһ. Бынан тыш Аллаһы Тәғәлә уның байлығын арттырыр, бала бағыу бәхете бүләк итеп һөйөндөрөр.

Ә «Йә Рабби ғфирли» тип ысын күңелдән әйтеүсенең гонаһтары кисерелер.

**الشَّكُورُ — әш-Шәкүүр.**
(35:30), (35:34), (42:23), (64:17)

***Рәхимле, Бүләкләүсе.***

Шөкөр итеү, шөкрәнә ҡылыу, яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап биреү тимәктер. Аллаһтың биргән ниғмәттәре өсөн ҡолдарының Уға шөкөр итеүҙәре бер вазифалыр. Аллаһ Үҙенә шөкөр иткәндәргә тағын да күберәк ниғмәттәр бүләк итер. Уның хазинаһы бөтмәҫ-төкәнмәҫ. **"Шөкөр итһәгеҙ, артығы мен*ән* бирермен"** тигән аят ("Ибраһим" сүрәһе, аят 7) был турала һөйләй.

Әлеге гүзәл исемде көн һайын 41 мәртәбә ҡабатлаған кеше аҡса, сәләмәтлек менән бәйле ҡыйынлыҡтарҙан, мәшәкәттәрҙән азат булыр, күңел тыныслығы табыр. Борсолғанда, хәсрәтләнгәндә, һыулы һауытҡа ҡарап, 41 мәртәбә «әш-Шәкүүр» тип ҡабатларға, һуңынан шул һыу менән йыуынырға кәңәшителә. Аллаһы Тәғәлә хәлегеҙҙе еңеләйтер, үҙегеҙҙе тиҙ арала ҡулға алырһығыҙ.

**العَلِيُّ — әл-Ғәлий.**
(2:255), (4:43), (31:30), (42:4), (42:51), (87:1)

***Олуғтарҙың Олуғы.***

Дәрәжә һәм мәртәбә яғынан Аллаһ иң юғарылыр, Ғәләмдең иң өҫтөнөлөр. Ләкин был өҫтөнлөк матди түгел, түбәнлектең ҡапма-ҡаршыһы булған бөйөклөктә түгелдер. Ул кешегә уның муйынындағы ҡара ҡан тамырынан да яҡын. Бөйөклөк тә Уға хастыр.

Аллаһы Тәғәлә әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлаған йәки, уны яҙып үҙендә һаҡлағандарҙың байлығын арттырыр, доғаларын ҡабул ҡылыр, имандарын нығытыр, маҡсаттарына ирешеүҙә юлдарын еңеләйтер.

**الْكَبِيرُ — әл-Кәбиир.**

(13:9), (22:32), (33:30), (34:23), (40:12)

***Бөйөктәрҙең Бөйөгө, Уға тиңдәр юҡ һәм бер кем дә Уны көсөнән мәхрүм итә алмай.***

Аллаһтың Ғәләмдә ише, уртағы, оҡшашы табылмаған иң бөйөк Барлыҡ булыуын күрһәтеүсе исемдер. Һәр нәмә Унын бөйөклөгөнә дәлилдер. Астрономия фәне буйынса үҙенең бер аҙ белеме булған кеше Унын бөйөклөгөн аңлар.

Эшһеҙ ҡалған кеше, ете көн ураҙа тотоп, әлеге гүзәл исемде көн һайын мең мәртәбә ҡабатлаһа, уны элекке хеҙмәтенә алырҙар, иншә Аллаһ. Үҙенә ҡарата иғтибар, хөрмәт артыуын теләгәндәргә иһә «әл-Кәбиир»ҙе 100 мәртәбә ҡабатларға кәңәш ителә.

**الْحَفِيظُ — әл-Хәфииҙ.**

(11:57), (34:21), (42:6)

***Үҙе яралтҡандарҙың Һаҡсыһы, Унын рәхим-шәфҡәте сикһеҙ.***

Был исем бик һаҡлаусы, ҡотҡарыусы мәғәнәһендә. Аллаһ ғәләмдең төҙөклөгөн боҙмайса, билгеле бер ваҡытҡа кәҙәр төҙөк тотор. Кешеләр эшләгән һис бер нәмәне онотмаҫ, һәммәһен һаҡлар. Ҡолдарын төрлө насарлыҡтарҙан ҡотҡарыр.

Инсан, Аллаһтың был исеменән өлөшөн алһа, эшләгән һәр эше Аллаһ тарафынан һаҡланыуын, имен ителеүен белер.

Был гүзәл исемде даими ҡабатлаусыны Аллаһы Тәғәлә юғалтыуҙарҙан, зыяндан һаҡлар. Уны көн һайын 16 мәртәбә уҡ ыған кеше тыныс йәшәр, бәлә-ҡаза күрмәҫ.

**اَلْمُقِيتُ — әл-Муҡыйт.**
(4:85)

***Ярҙам итеүсе, йән эйәләрен һәр төрлө ниғмәттәр менән тәьмин итеүсе, уларҙың күләмен билгеләүсе.***

Был исемдең тамырында ризыҡ биреү мәғәнәһе бар. Йәғни Аллаһ яратҡан һәр барлыҡтың аш-һыуын, ризығын бирер. Аллаһ яратҡандарының береһен дә онотмаҫ, Уның өсөн онотоу һис мөмкин түгелдер.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен 7 мәртәбә уҡып, һыуға өргән һәм һуңынан шул һыуҙы эскән кешенең теләктәре ҡабул була. Әлеге һыуҙы көйһөҙ балаға ла эсерергә мөмкин. Иншә Аллаһ, ул яҡшы яҡҡа үҙгәрер.

**اَلْحَسِيبُ — әл-Хәсииб.**
(4:6), (4:86), (33:39)

***Һәр нәмәне Иҫәпкә алыусы. Ул бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәй, Ул яралтҡан йән эйәләре лә тормошта ирешкән уңыштары өсөн бары Уға ғына рәхмәтле булырға тейеш.***

Һәр кемдең был донъяла ғүмере буйынса ҡылған һәр эшенең хисабын иң яҡшы белеүсе тимәктер. Ул беленмәгән нәмәләрҙең иң нескәләренә ҡәҙәр белер. Хатта инсандың ғүмере буйына ни ҡ әҙәр һауа һулауына тиклем белеп торор.

Берәй нәмәнән йәки кемдән булһа ла ҡурҡҡанда, аҙна кис көндән башлап ете көн дауамында һәр иртә-кис әлеге исемде 70 мәртәбә ҡабатларға кәрәк. Исемде ҡабатлағандан һуң

«Хәсбийәллаһүл-Хәсиб» тип әйтергә лә онотмағыҙ. Шулай иткәндә ҡурҡыуҙарығыҙ таралыр, иншә Аллаһ.

**الْجَلِيلُ — әл-Жәлиил.**

***Олуғ, Хаҡ олуғлыҡ Унда ғына.***

Аллаһ жәләл эйәһелер. Олуғлык һәм бөйөклөк Уға ғына хастыр. Уның заты бөйөк булған кеүек, сифаттары ла бөйөктөр. Кәбиир сифаты затының, асылының камиллығына, жәлиил сифаты сифатының камиллығына, Ғәҙыйм сифаты иһә затының да, сифатының да камиллығына дәлил булыр.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен, ҡағыҙға йәки туҡыма ки ҫәгенә яҙып, үҙендә һаҡлаған кеше ихтирам-хөрмәткә ирешер.

**الْكَرِيمُ — әл-Кәриим.**

(23:116), (27:40)

***Оло йомартлык Эйәһе, Уның мәрхәмәте сикһеҙ.***

Кәрамлеге һәм йомартлығы бик күп тимәктер. Язалау, үс алыу ҡулында булған хәлдә Ул кәрамы менән ғәфү итер, к олдарының эшләгән гонаһтарына ҡарамайса, уларға йомарт рәүештә ниғмәттәр насип итер.

Үҙен хөрмәт итеүҙәрен теләгән кеше әлеге гүзәл исемде, урын-ергә яҡкас, йоҡоға киткәнсе ҡабатларға тейеш.

**الرَّقِيبُ — әр-Раҡыйб.**

(4:1), (5:117)

***Үҙе яралтҡан йән эйәләрен һәм уларҙың ҡылған ғәмәлдәрен Күҙәтеүсе, Унан бер нәмә лә йәшерен йәки сер булып ҡала алмай.***

Ғәләмдәге һәр нәмәне күҙәтеүсе, бөтөн барлыктарҙы күҙәтеү аҫтында тотоусы тимәктер. Аллаһтың көҙрәте бөйөклөгөнә тура

килә. Һис бер нәмә Уның күҙәтеүенән ситтә ҡала алмаҫ. Унан йәшерен, Ул күрмәгән бер эш тә ҡылынмаҫ.

Аллаһы Тәғәлә был гүзәл исемде 7 мәртәбә ҡабатлап өргән кешенең ғаиләһен, мал-мөлкәтен һәр төрлө бәлә-казаларҙан һаҡ лар. Уны даими ҡабатлаһаң, үҙең дә казаларҙан йыраҡ торорһоң.

**الْمُجِيبُ — әл-Мүжииб.**
(11.61)

***Изге теләктәрҙе ҡабул ҡылыусы, доға менән Уға һәм бары тик Уға ғына мөрәжәғәт итергә кәрәк.***

Үҙенә доға ҡылып ялбарғандарҙың доғаларын ҡабул итеүсе тимәктер. Аллаһ ихлас күңелдән доға ҡылғандарҙың доғаларын ҡабул итер. Бының мәғәнәһе теләктәрҙе еренә еткереү. Ҡол Аллаһтан нимәне теләргә, нимәне теләмәҫкә икәнен белергә тейеш.

Әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлағандарҙың доғалары Аллаһы Тәғәлә тарафынан һәр ваҡыт ҡабул ҡылыныр.

**الْوَاسِعُ — әл-Үәәсиғ.**
(2:115), (2:247), (2:261), (2:268), (3:73), (3:54)

***Киңлек эйәһе, Уның мәрхәмәте сикһеҙ.***

Белеүе, ихсаны һәм мәрхәмәте бик киң тимәктер. Ғилеме киң, сикһеҙҙер. Ҡөҙрәте киң, икһеҙ-сикһеҙҙер. Уға хас булған сифаттарҙа ла сик күҙҙә тотолмаҫ.

Әлеге гүзәл исемде күп мәртәбәләр ҡабатлаған кешенең рухы нығыр һәм ул матди яктан бәйһеҙ булыр. Акса мәсьәләһендә ҡ ыйынлыктар кисергәндәргә, аҙ хеҙмәт хаҡы алып эшләүселәргә лә «әл-Үәәсиғ»те даими ҡабатларға кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, хәл уңай якка үҙгәрер.

**الْحَكِيمُ — әл-Хәкиим.**

(2:129), (2:260), (31:27), (46:2), (66:2), (2:32)

***Зирәк, һәр ғәмәлен аҡыл менән башҡара.***

Аллаһ хикмәт эйәһелер. Һәр бер нәмәне һәр ваҡыт урынлы эшләр. Эшләүендә кәмселек йәки хата булмаҫ. Уның әмер һәм тыйыуҙарында кешеләр өсөн хикмәттәр бар. Ул һәр ваҡыт кешеләрҙең мәнфәғәтенә тура килгән әмер һәм тыйыуҙарҙы бирер. Кешегә уларҙы өйрәнеү һәм тормошонда улар менән эш итеү йөкләнер.

Был гүзәл исемде даими ҡабатлаған кешегә Аллаһы Тәғәлә ғилем һәм зирәклек бирер. Ундайҙарҙың теләктәре лә тормошҡа ашыр, эштәре һәр ваҡыт уң булыр.

**اَلْوَدُودُ — әл-Үәдүүд.**

(11:90), (85:14)

***Үҙ ҡолдарын яратыусы һәм әүлиәләр («әүлийә» — күп һан. «Үәли» һүҙенән — тәҡүә, Аллаһҡа ысын күңелдән ышанған кеше) тарафынан Яратылыусы, йәғни әүлиәләр Уны яраталар.***

Аллаһ яҡшы ҡолдарын һөйөр, уларға рәхмәт һәм бәрәкәтен ирештерер. Ул ризаһы һәм һөйөүенә ирешергә тейешле булған берҙән-бер Барлыҡ.

Ғаиләлә ир менән ҡатын араһында аңлашылмаусылыҡтар булһа, ыҙғыш-талаштар йыш ҡабатланһа, әлеге гүзәл исемде 1000 мәртәбә уҡып, ризыҡҡа өрөргә һәм унан бергәләп ауыҙ итергә кәрәк. Иншә Аллаһ, ике арала мөхәббәт хистәре яңырыр, ир менән ҡатындың бер-береһенә хөрмәте, ихтирамы артыр.

Асыуланышҡан кешеләрҙе татыулаштырыу, дошманлыҡҡа сик ҡуйыу өсөн дә, табын йәйеп, ризыҡ өҫтөндә әлеге исемде 1001 мәртәбә ҡабатларға кәңәш ителә.

**الْمَجِيدُ — әл-Мәжиид.**
(11:73)

***Шөһрәтле.***

Даны бөйөк һәм юғары тимәктер. Уға көс етмәҫ. Ул еңелмәҫ. Ләкин гүзәл хәрәкәттәр, яҡшы эштәр менән ризалығына ирешә алыр. Ҡылынған яҡшылыҡтарға яҡшылыҡ менән яуап бирер.

Сир-сырхауҙан интегеүсе кешегә ай календарының 13, 14 һәм 15 көндәрендә ураҙа тотоп, ифтарҙан (ауыҙ асыу) һуң әлеге гүзәл исемде күп тапкыр ҡабатлап, һыуға өрөргә һәм шул шифалы һыуҙы эсергә кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, нәтижәһе уңай булмай ҡалмаҫ. «Әл-Мәжиид»те даими ҡабатлағандарҙы ла Аллаһы Тәғәлә хөрмәт-ихтирам менән бүләкләр.

**الْبَاعِثُ — әл-Бәәғиҫ.**

***Ҡийәмәт көнөндә Үҙе яралтҡан йән эйәләрен Тергеҙеүсе.***

Терелтеүсе тимәктер. Бер көн барыбыҙға ла донъяуи тормошобыҙҙың ахыры киләсәк һәм ғәләмдәге был төҙөклөк бо ҙоласаҡ, бер йәне лә ҡалмаясаҡ. Үлгәндән һуң Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе ҡабат терелтәсәк һәм хисап аласаҡ. Әл-Бәәғиҫ исеме шуны аңлата.

Аллаһы Тәғәлә, һәр көн йоҡоға китер алдынан, ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып, әлеге гүзәл исемде 100 йәки 101 мәртәбә ҡ абатлаған кешенең йөрәген иман нуры менән яҡтыртыр, зирәклек бирер. Ә уны йыш ҡабатлағандарҙың тәҡүәлеге артыр.

**الشَّهِيدُ — әш-Шәһиид.**
(4:79), (4:166), (22:17), (41:53), (48:28)

***Шаһит, бер нәмә лә Уның иғтибарынан ситтә ҡалмай, Ул Үҙ ҡолдары тураһында барыһын да белеп тора.***

Аллаһ һәр вакыт һәм һәр ерҙә әҙер булған барлык тимәктер. Шаһит — бер вакиғаға ғына таныклык, геуаһлык (шәһәҙәт) биреүселер. Бөйөк Аллаһ бөтөн вакиғаға шаһиттыр. Ул күрмәгән, белмәгән, шаһит булмаған бер ниндәй вакиға ла, бер нәмә лә юктыр.

Ҡатынының (балаһының) холкон якшы якка үҙгәртергә теләгән кешегә, ҡулын унын маңлайына ҡуйып, әлеге гүзәл исемдә 21 мәртәбә ҡабатларға һәм өрөргә кәңәш ителә.

**الْحَقُّ — әл-Хәкк.**

(6:62), (22:6), (23:116), (24:25), (31:30)

***Хаҡиҡый.***

Барлығы бер ҙә үҙгәрмәй торған һәм торасаҡ барлык хәкикәт тимәктер. Үҙгәреш барлык мәхлүкәткә хастыр. Аллаһ өсөн иһә ү ҙгәреш юктыр. Ул хактыр.

Туғаны, яҡын кешеһе хәбәрһеҙ юғалғандарға, мал-мөлкәтен урлаткандарға әлеге гүзәл исемдә ҡағыҙ битенең дүрт мөйөшөнә яҙырға һәм иртәнге намаҙ алдынан, уны ус төбөнә ҡуйып, доға к ылырға кәрәк. Иншә Аллаһ, юғалған кеше тиҙҙән ҡайтыр, мал табылыр.

**الْوَكِيلُ — әл-Үәкиил.**

(3:173), (4:81), (4:171), (28:28), (33:3), (73:9)

***Үҙенә Һыйындырыусы, йән эйәләре бары тик Уға ғына таянырға тейеш.***

Ысулына эйәреп, Аллаһы Тәғәләне үәкил итеп, эштәрен төҙ әтеүсе, дөрөҫ юлға ҡуйыусы тимәктер. Иң яҡшы үәкил Аллаһтыр. Ләкин Уны эштәребеҙҙә нисек үәкил итеүебеҙҙе белеү кәрәк.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен даими ҡабатлаған кешене бәлә-ҡазалар ситләп уҙыр. Һыуға батыуҙан, янғында йәки башҡа фажиғәле хәлдәрҙә һәләк булыуҙан ҡурҡҡандарға шулай уҡ был исемде ҡабатлау яҡшы.

**الْقَوِيُّ — әл-Ҡауий.**
(11:16), (22:60), (22:74), (42:19), (57:25), (58:21)

***Көслөләрҙең Көслөһө, еңеүсе.***

Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәт эйәһелер. Йәғни Уның көсө етмәҫ бер эш тә юҡтыр. Бер ниндәй эште ҡылыу ҙа Уның өсөн ауыр түгел. Теләгәнен эшләүҙә, яратыуҙа, юҡ итеүҙә бер көс тә сарыф итмәҫ — "Бул" тип әйтеү ҙә етер һәм ул булыр.

Эҙәрлекләүҙәргә, кәмһетеү-түбәнһетеүҙәргә дусар ителгән кешегә әлеге гүзәл исемде даими ҡабатларға кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, тиҙҙән хәле яҡшы яҡҡа үҙгәрер. Ләкин быны уны аҡ лаусы шарттар булғанда ғына эшләргә кәрәк.

**الْمَتِينُ — әл-Мәтиин.**
(51:58)

***Ҡөҙрәтле, Ул башҡаларҙың ярҙамына мохтаж түгел.***

Аллаһтың ҡеүәт һәм ҡөҙрәте камилдыр. Уны зәғиф, көсһөҙ хәлгә килтерәсәк бер ниндәй көс юҡ. Ул бер эште ҡылғанда бер кемгә лә мохтаж түгел.

Һөтө булмаған ҡатын-ҡыҙ Аллаһы Тәғәләнең әлеге гүзәл исеме яҙылған ҡағыҙҙы һыуҙа тотоп, һуңынан шул һыуҙы эсһә, сырхауына файҙа-шифа табыр. Даими рәүештә «Әл-Мәтиин» тип ҡабатлағандарҙың иһә эштә, ғаиләлә булған борсоу-мәшәҡ әттәре юҡҡа сығыр.

**الْوَلِيُّ — әл-Үәлий.**

(2:107), (2:257), (3:68), (4:45), (7:196), (42:26), (45:19)

***Үҙенә ысын күңелдән ышанғандарға Мәрхәмәт итүесе, ә уларҙы хөрмәт итеүселәргә ярҙам ҡулы Һуҙыусы.***

Аллаһ һөйгән колдарының дуҫылыр. Аллаһтың дуҫтарына к урҡыу һәм кайғы булмауын белдергән аяттар бар. Ул дуҫтарына һәр вакыт беҙ уйға ла килтерә алмаған рәүештә ярҙам итер. Уға дуҫ булыуҙан был донъяла һәм әхирәттә өҫтөнөрәк бер дәрәжә лә юҡтыр.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен даими ҡабатлаған кеше рухи үҫеш кисерер. Ҡатыны холоҡһоҙ булған ир-атҡа ла был исемде ҡатыны йәнәшәһендә ҡабатларға кәңәш ителә. Ярҙамы теймәй ҡалмаҫ, иншә Аллаһ.

**الْحَمِيدُ — әл-Хәмиид.**

14:1), (14:8), (22:64), (31:12), (31:26), (41:42)

***Маҡтауҙарға лайыҡ, Данлыҡлы.***

Хәмед ителәсәк, макталынасак берҙән-бер барлык Аллаһ к ына булыуын аңлата. Хәмед — мактау Уға ғына лайыктыр. Һәр барлыҡ беҙ аңлата белмәгән рәүештә тел менән Уны ла тәсбих итер, мактар. Мөъминдәр намаҙҙың һәр рәкәғәтендә "Фатиха" сүрәһен укып Уны мактарҙар. Телдәре менән мактағандары кеүек, хәл һәм хәрәкәттәре менән дә маҡтап камиллыкка ирешер ҙәр.

Насар ғәҙәттәрҙән арыныу өсөн әлеге гүзәл исемде 45 көн дауамында һәр көн 93 мәртәбә ҡабатлау зарур. Бынан тыш «Әл-Хәмиид»те даими укыған кешене яратырҙар, хөрмәт итерҙәр.

**الْمُحْصِى — әл-Мүхсый.**

***Хисап ҡылыусы, һәр нәмәнән Хәбәрҙар.***

Һәр нәмәнең һанын белеүсе мәғәнәһендәлер. Аллаһ белмәгән нәмә юҡ. Ул диңгеҙҙәрҙәге һыуҙарҙың нисә тамсы булыуын да белер. Уның өсөн никәҙәр күп нәмә булһа ла, белмәү тигән нәмә юҡтыр.

Әлеге гүзәл исемде һәр көн 20 мәртәбә ҡабатлап, 20 телем икмәккә өргән кешегә ярҙам ҡулы һуҙырҙар.

**الْمُبْدِئُ — әл-Мүбди.**
(10:4), (10:14), (27:64), (29:19), (85:13)

***Башлаусы, Күсергес алмайынса, үрнәкһеҙ ер һәм Күктәрҙе Яралтыусы.***

Һәр нәмәне бар иткән, яраткан Бөйөк Барлыҡ — Улдыр. Уның яратыуында үрнәк алған бер нәмә юҡ. Ул һәр нәмәне беренсе яратҡандыр.

Йөклө ҡатын-ҡыҙҙың балаһы төшөү ҡурҡынысы булһа йәки толғак ваҡытынан элек башланмаһын өсөн, иртәнге намаҙ алдынан, ҡулды көмәненә ҡуйып, әлеге гүзәл исемде 99 мәртәбә ҡабатларға кәңәш ителә.

**الْمُعِيدُ — әл-Мүғыйд.**
(10:4), (10:34), (27:64), (85:13)

***Ҡайтарыусы.***

Яратҡандарҙы юҡ иткәндән һуң киренән яратыусы, терелтеүсе тимәктер. Үлем менән бөтөн нәмә бөтмәй, киреһенсә, ысын һәм мәңгелек хәят (йәшәү, тормош) башлана. Быны эшләүсе лә Аллаһтыр.

Кем дә булһа хәбәрһеҙ юғалһа, был гүзәл исемде башкалар йоҡ лағанда йорттоң һәр мөйөшөнә 70 мәртәбә уҡып сығырға кәңәш ителә. Шулай иткәндә, юғалған кеше 7 көн эсендә әйләнеп ҡ айтыр йәки уның ҡайҙалығы мәғлүм булыр.

**الْمُحْيِ — әл-Мүхйи.**

(2:28), (3:156), (7:158), (15:23), (30:50), (30:59), (57:2)

***Терелтеүсе, Ул теләһә, һәр нәмәгә йән керә, йыһандағы бар нәмәне юҡтан Ул бар итте, Ул — үлгәндән һуң терелтеүсе.***

Яратып тормош биреүсе, йәшәтеүсе тимәктер. Аллаһтың теләге булмаһа, бер ниндәй барлыҡ хәят (ғүмер) тапмаҫ ине. Ҡайһы бер ғалимдар был исемде ғарифтәрҙең (Аллаһтың һөйөклөләренең) күңелдәрен байытҡан, йәнләндергән мәғәнәһендә аңлаталар.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен күп мәртәбәләр ҡабатлап, ауырыу кешегә өрһәң (үҙ-үҙеңә лә ярай), ул һис шикһеҙ һауығып аяҡҡа баҫасаҡ. Ә насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоу өсөн, «әл-Мүхйи»не ҡулға уҡып, ҡул менән бөтөн тәнде һыпырып сығырға кәрәк.

**الْمُمِيتُ — әл-Мүмийт.**

(3:156), (7:158), 15:23), (57:2)

***Үлтереүсе, ҡолдарының донъялағы ғүмерен үлем менән Сикләүсе.***

Билгеле бер заман йәшәгәндән һуң барлыҡтарҙы юҡ итеүсе тимәктер. Мәхлүҡәтте йәшәтеүсе — Ул булған кеүек, юҡ итеүсе лә Улдыр.

Ауыр минуттарҙа үҙ-үҙен ҡулға ала алмаған кешегә әлеге гүзәл исемде, урын-ергә ятҡас йоҡоға киткәнсе ҡабатлау зарур. Шулай иткәндә, күңел тыныслығын табыр, иншә Аллаһ. Ә Ҡийәмәт көнөнөң ғазаптарынан ҡотолоу өсөн «әл-Мүмийт»те көн һайын күп тапҡыр уҡырға кәрәк.

**الْحَيُّ — әл-Хәйй.**

(2:255), (3:2), (20:111), (25:28), (40:65)

***Мәңге тере, Йәшәйешенең башы ла, аҙағы ла юҡ.***

Был исем Аллаһтың даими тере булыуын белдерә. Яратылғандар тыуыр, үҫер һәм үлерҙәр. Ләкин Аллаһ тыумаҫ һәм үлмәҫ. Ул һәр ваҡыт терелер, баҡыйҙыр (мәңгелек). Йәшәү өсөн ҡайһы бер шарттарға бәйле беҙҙең тормошобоҙ уҙыр. Аллаһ иһә бер нәмәгә лә бәйле түгел, бер нәмәгә лә ихтыяжы юҡ.

Әлеге гүзәл исемде һәр көн 3000 мәртәбә ҡабатлаған кешене Аллаһы Тәғәлә һаулыктан айырмаҫ. Ниндәй ҙә булһа сир-сырхау ҙан ҡотолоу өсөн иһә уны, миск һәм алһыу һыу менән ҡағыҙға яҙ ып, ҡағыҙҙы һыуҙа сылатырға һәм һуңынан шул һыуҙы ауырыуға эсерергә кәңәш ителә.

**الْقَيُّومُ — әл-Ҡайййүм.**

(2:255), (3:2), (20:111)

***Хаҡиҡый, Бәйһеҙ, мохтажлыҡ Кисермәүсе.***

Күктәрҙе һәм ерҙе бер тәртиптә тотоусы тимәктер. Уның тәртибен бер кем боҙа алмаҫ. Әммә Үҙе теләһә, һәр ваҡыт боҙа алыр. Ләкин, мәрхәмәтле үә шәфкәтле булғанға күрә, Ул быны эшләмәҫ. Яҙған ваҡытына тиклем ошо тәртибен дауам итер.

Аллаһы Тәғәлә әлеге гүзәл исемде ысын күңелдән һәм күп тап ҡырҙар ҡабатлағандарҙың башҡалар араһында дәрәжәһен күтәрер, байлығын арттырыр, мал-мөлкәтен бәләләрҙән һаҡлар. Ә иртәнге намаҙҙан һуң, көн тыуғансы, «йәә Хәййүү, йәә Ҡ аййүүмү» тип ҡабатлау ялкаулыкты, хәлһеҙлекте бөтөрөр.

**الْوَاجِدُ — әл-Үәәжид.**

(38:44)

***Бай, Ул бар иткән һәр нәмә хаҡиҡый һәм камил.***

Аллаһ теләгән вакытта теләгәнен табыр. Аллаһы Тәғәләгә Үҙе табырға теләгән нәмәләр өсөн көтөү, вакыт билгеләү йәки саралар эҙләү тигән нәмә юк.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен табын янында к абатлаһаң, ризык менән күңелгә — нур, тәнгә көс инә. Уны күңел тыныслығы юғалғанда, күңел төшөнкөлөгө кисергәндә лә кабатлайҙар.

**الْمَاجِدُ — әл-Мәәжид.**
(85:15)

***Мәрхәмәтле, Уның бөйөклөгө лә гүзәл***

Даны бөйөк, кәрамы (йомартлығы) киң мәғәнәһендәлер. Уның йомартлығының сиге юк. Ул кешеләрҙе башта саф һәм матур як шы эштәр эшләргә йүнәлтер, һуңынан ул эштәр өсөн уларға күп ниғмәттәр бүләк итер. Былдай колдары өсөн йәннәтен әҙерләр.

Был гүзәл исемде яңғыҙ калып, рухи күтәренкелек хәлендә күп мәртәбәләр кабатлаған кеше нурҙың хаклығына шаһит булыр.

**الْوَاحِدُ — әл-Үәхид.**
(2:163), (5:73), (9:31), (18:110), (37:4), (13:16), (112:1)

***Берҙән-бер, Уға тиңдәш бер кем дә юк.***

Һәр карашта: затында, сифаттарында, эштәрендә, исемдәрендә ише, окшашы, уртағы, ярҙамсыһы булмаған берҙ ән-бер барлык — Аллаһтыр. "Ихлас" сүрәһе Уның был сифаттарын аңлатып бирә. "Ихлас" сүрәһен йыш укыу бик сауаплы.

Был гүзәл исемде көн һайын 1000 мәртәбә кабатлаған кешенең фани донъяға карата булған мөхәббәте һәм куркыуы китер. Ә «йәә Әхәәдү» исемен көн һайын 1000 тапкыр к абатлағандарҙың доғаларын фәрештәләр Аллаһы Тәғәләгә

еткерергә ашығырҙар. Аллаһы Тәғәлә иһә, яуап итеп, Үҙенең мәрхәмәтен, тыныслыҡ, бәрәкәт индерер һәм йәшерен серҙәрен асыр.

**الصَّمَدُ — әс-Самәд.**

(112:1)

***Мәңгелек, бар нәмә Уның ихтыярына бойһона, бар йән эйәләре Уға мохтаж, ә Уның бер нәмәгә лә ихтыяжы юҡ.***

Ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереүсе, ҡайғыларҙы бөтөрөүсе — Аллаһтыр. Ҡол бары тик Уға ышаныр, Уға ғибәҙәт ҡылыр, Унан ғына ярҙам көтөр, Уға ғына тәүәккәл ҡылыр.

Кем әлеге гүзәл исемде иртәнге намаҙ алдынан сәждә ҡ ылғандағы кеүек итеп 115 тапҡыр ҡабатлай, шул намыҫ һәм ғәҙ еллек менән эш итер, йәшәр. «Әс-Самәд»те тәһәрәт алғанда күп тапҡырҙар ҡабатлаған кеше иһә ваҡытлы нәмәләрҙән, фани донъя ләззәттәренән азат булыр.

**الْقَادِرُ — әл-Ҡаадир.**

(6:65), (17:99), (36:81), (46:33), (75:40), (86:8)

***Ҡөҙрәтлеләрҙең Ҡөҙрәтлеһе, аҡыл менән эш итеүсе, юҡтан бар ҡылыусы. Ул яралта һәм юҡҡа сығара.***

Теләгән нәмәне теләгәненсә эшләргә хәленән килгән барлыҡ — Аллаһтыр. Уның ҡөҙрәтенең сиге юҡтыр, Уның һәр нәмәгә көсө етә.

Ике рәкәғәт өҫтәмә намаҙҙан һуң әлеге гүзәл исемде 100 мәртәбә ҡабатлаған кеше дошмандарынан өҫтөн булыр. Ауыр, яуаплы эш башлар алдынан да уны 41 мәртәбә ҡабатларға кәңәш ителә — аҙағы уңышлы тамамланыр. Ә был исемде йыш уҡыу доғаларҙың, изге теләктәрҙең тормошҡа ашыуына килтерә.

**الْمُقْتَدِرُ — әл-Мөҡтәдир.**
(18:45), (54:42), (54:55)

***Ҡөҙрәтле, Үҙ ҡолдарына Мәрхәмәтле.***

Ер йөҙөндә кеүәт һәм ҡөҙрәт эйәһе булғандар бар. Аллаһтың улар өҫтөнән, йәғни улар аша, теләгәнен теләгән ваҡытта эшләргә көсө етер. Аллаһтың ҡөҙрәте ҡаршыһында уларҙың көстәренең бер тәьҫире лә юҡтыр.

Көндө Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен ҡабатлауҙан башлаған кеше маҡсаттарына ирешер, эштәре уңышлы барыр. Уны йыш ҡабатлау дөрөҫлөктө табырға ярҙам итер.

**الْمُقَدِّمُ — әл-Мөҡаддим.**
(50:28)

***Алға сығарыусы.***

Аллаһ теләгәнен алға ебәрер, ҡайһы бер кешеләрҙе башк аларынан өҫтөн ҡылыр. Ҡыҫҡа ваҡытта уларға мөмкинлектәр бирер, ғиззәт һәм шәрәф-хөрмәт эйәһе итер.

Әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлаған кешенең Аллаһтың рәхмәте менән ҡыйыулығы артыр, дошмандарынан өҫтөн булыр (онотмағыҙ: үҙ-үҙеңде яратыу — иң яуыз дошман). Уны йыш ҡ абатлаусы шулай уҡ насар ғәҙәттәрҙән арыныр, холҡо яҡшы яҡҡа үҙгәрер.

**الْمُؤَخِّرُ — әл-Мөәххыйр.**
(11:8), (71:4)

***Ахырҙа булырға тейешле ваҡиғаларҙы, гонаһлыларҙы, кафырҙарҙы Үҙ ихтыяры менән Артҡа сығарыусы.***

Аҙаҡҡа, һуңға ҡалдырыусы тимәктер. Аллаһ бер төркөм инсандарҙы алға сығарыр, мөмкинселек бүләк итеп, төрлө дәрәжәләргә ирешергә ярҙам итер. Ҡайһы бер ваҡытта иһә к

олдарының теләгәндәрен шунда уҡ бирмәҫ, һуңға ҡалдырыр. Уның былай эшләгән хикмәтен кешеләр белә алмаҫ, сөнки кешеләрҙең белеме сиклелер. Аллаһтың белеменең иһә сиге юҡ тыр.

Тәҡүәлеккә, рухи үҫешкә ирешеү өсөн әлеге гүзәл исемде көн һайын 100 мәртәбә ҡабатларға кәрәк.

**الْأَوَّلُ — әл-Әүүәл.**

(57:3)

***Беренсе, Уға тиклем һис бер нәмә, һис кем булмаған, Уның йәшәйешенең башланғысы юҡ.***

Элек, Барлыҡ — Улдыр. Уның элекке Барлыҡ булыуы Уның бер башланғысы булыуын күрһәтмәҫ. Уның өсөн "Әүүәл" тип әйтеү, икенсеһе "барҙыр" тип әйтеү түгелдер. Үҙенән әүүәл бер ниндәй ҙә барлыҡ юҡ тимәктер.

Бала теләгәндәргә әлеге гүзәл исемде көн һайын 40 мәртәбә ҡ абатларға кәңәш ителә.

**الْآخِرُ — әл-Әәхыйр.**

(57:3)

***Һуңғы, Ул — мәңгелек, Уның йәшәйешенең сиге юҡ, Унан һуң һис кем, һис бер нәмә булмаясаҡ.***

Унан әүүәл бер барлыҡ булмаған шикелле, Унан һуң да бер ниндәй барлыҡ юҡтыр һәм булмаясаҡ. Бер көндө бөтөн нәмә юҡ буласаҡ, тик бер Аллаһ ҡына мәңге ҡаласаҡ.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен көн һайын 1000 мәртәбә ҡабатлаған кешенең:

1) тәҡүәлеге, Аллаһҡа ҡарата мөхәббәте артыр,

2) донъя ләззәттәренә булған бәйлелеге күңеленән ҡыҫырыҡлап сығарылыр,

3) гонаһтары ғәфү ителер,
4) Әхирәткә Хак диндә һәм тыныс күңел менән күсер.

**الظَّاهِرُ — əз-Ҙааһир.**
(57:3)

***Асыҡтан-асыҡ, Бар нәмәнән өҫтөн.***

Аллаһ асыктыр. Уны бер барлык буларак күрә алмайбыҙ. Әммә күргән һәр нәмә Уның барлығына дәлилдер. Күрә алмаған нәмәләр ҙә барҙыр, улар ҙа Уның барлығына дәлилдер.

Аллаһы Тәғәләнең был гүзәл исемен һәр көн ишраҡ намаҙынан һуң 500 мәртәбә ҡабатлаған кешенең йөрәге иман нуры менән тулыр, күҙенең күреүе яҡшырыр, иншә Аллаһ.

**Иғтибар:** *ишрак намаҙында рәкәғәттәр һаны 2-нән 4-кә тиклем булырға мөмкин. Ул ҡояш сығып 15-20 минут уҙғас ук ыла.*

**Хәҙистәрҙән өҙөктәр:** *Иртәнге намаҙ йәмәғәт менән уҡыла, ул тамамланғас, ҡояш сыҡкансы зекер әйтеп, һуңғарак ике рәкәғәт ишрак намаҙы уҡыған кешегә быының сауабы бер хаж һәм бер ғөмрә кәҙәр яҙылыр (Тирмиҙи риүәйәт ҡылған).*

*Ишрак намаҙы укыған кешенең бар гонаһтары кисерелер һәм, әгәр шул төндә фани донъя менән хушлашһа, урыны йәннәттә булыр (Тәбәрәни риүәйәт ҡылған).*

*Ишрак намаҙын уҡығандарҙы Аллаһы Тәғәлә шул көн дауамында ярҙамынан, мәрхәмәтенән ташламаҫ. (Тирмиҙи һәм Әбү Дауыт риүәйәт иттеләр).*

*Билдәле Ислам шәйехе Солтан Бахуның әйтеүенсә, ишрак намаҙы — уҡылыуы зарур булған намаҙҙарҙың береһе. Ул, Аллаһы Тәғәләнең ризалығына ирешеү өсөн, үҙенең сәхәбәләренә лә был намаҙҙы даими укырға кәңәш иткән. Бынан тыш намаҙҙ*

*ы укыганда кояштың беренсе нурҙары менән йөрәккә иман нуры инә.*

*Иртәнге һәм ишрак намаҙҙары араһында зекер әйтеү мәжбүри түгел. Әммә был вакытта уның сауабы күпкә аҙырак була.*

**اَلْبَاطِنُ — әл-Бәәтыйн.**

(57:3)

***Йәшерен, асык һәм йәшерен нәмәләрҙе Белеүсе, Уның барлығы хак, ләкин был донъяла Ул күҙгә күренмәй.***

Аллаһтың барлығы асык булһа ла, Ул — йәшерендер. Беҙ Уның ысын хәләтен (киәфәтен) белә алмайбыҙ. Ышанабыҙ ҙа һәм beләбеҙ ҙә: Ул күктә, ләкин ғилеме менән һәр ерҙә. Ул белмәгән ер юктыр.

Әлеге гүзәл исемде көн һайын 33 мәртәбә кабатлаған кешегә бөйөк серҙәр асылыр һәм йөрәге Аллаһка карата мөхәббәт хисе менән тулыр. Ә ***«Һүүәл Әүүәлү үәл-Әәхыйру үәҙ-Ҙааһиру үәл-Бәәтыйну үә һүүә ғәләә күлли шәй иң кадиир»***, — тип ысын күңелдән кабатлау изге теләктәрҙең тормошка ашыуына килтерә.

**اَلْوَالِى — әл-Үәәли.**

(13:11), (42:9)

***Хәким, бар йән эйәләре менән Идара итеүсе.***

Бөтөн ғәләмде бер Үҙе генә йүнәлтеүсе. Ул яратыр ҙа, юк та итер. Үлтерер ҙә, терелтер ҙә.

Әлеге гүзәл исемде көн һайын 99 мәртәбә кабатлағандарҙы Аллаһы Тәғәлә һәр төрлө бәләләрҙән, йорт-ерҙәрен зыян-зарарҙ ан һаклар. Дошманды бойһондороу («дошман» тигәндә иң беренсе сиратта үҙ-үҙеңде яратыуҙы күҙ алдында тоторға кәрәк)

өсөн уның менән осрашыр алдынан 11 мәртәбә «әл-Үәәли» тип ҡ абатларға кәрәк.

**الْمُتَعَالِى — әл-Мүтәғәәли.**
(13:9)

***Бөйөктәрҙең Бөйөгө.***

Һәр нәмәнән, һәр хәләттән (ауырлыктан) өҫтөн тимәктер. Уның өҫтөнлөгө мәңгелер. Уның бер нәмәгә лә ихтыяжы юҡтыр.

Әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлаған кешенең эштәре уңышлы барыр, ә инде ниндәй ҙә булһа ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, тиҙ арала хәл ителер, иншә Аллаһ. Улай ғына ла түгел Аллаһ уларға сарыф ителгән көс-егәрлекте кире ҡайтарыр.

**الْبَرُّ — әл-Бәрр.**
(52:28)

***Мәрхәмәтле, һорағандарға мәрхәмәт һәм шәфҡәт Күрһәтеүсе.***

Аллаһ яҡшылыҡ эшләүселер, һәр якшылыҡ — Унандыр. Ул ҡ олдарына һәр ваҡыт яҡшылыҡ эшләр. Ҡолдары ла үҙ араларында бер-береһенә ярҙам итергә тейештәр.

Әлеге исемде көн һайын 7 мәртәбә ҡабатлаған кеше иҫерткес эсемлек ҡулланыу һәм зина ҡылыу кеүек ҙур гонаһтарҙан һаҡ ланыр, донъялағы ваҡытлы ләззәттәрҙән күңеле ҡайтыр, уйҙары Әхирәт тураһында ғына булыр, иншә Аллаһ. «Әл-Бәрр» тип 7 мәртәбә ҡабатлап, яңы тыуған сабыйға өрһәң, уны һәр төрлө яуызлыҡтар ситләп уҙыр.

**التَّوَّابُ — әт-Тәүүәәб.**
(2:37), (2:128), (4:64), (40:3), (49:12), (110:3)

***Тәүбәне ҡабул ҡылыусы, Ярлыҡаусы, Тәүбә иттерүсе.***

Аллаһ тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе, гонаһтарҙы кисереүсе тимәктер. Аллаһтың тәүбә ишеге һәр ваҡыт асыҡ. Күп гонаһ эшләгән кеше, "Раббымдың йөҙөнә карарлыҡ хәлем ҡалманы" тип, гонаһҡа батмаһын, шунда уҡ үкенеп сәждә ҡылһын, ғәфү һәм мәғфирәт һораһын.

Әлеге гүзәл исемде көн һайын күп мәртәбәләр ҡабатлағандарҙ ың маҡсаттары, теләктәре тормошҡа ашыр. Кәмһетеүсе, түбәнһетеүсе кеше янында был исемде күңелдән генә 10 мәртәбә ҡабатларға кәңәш ителә. Ул, теләһә лә, зыян һала алмаҫ. «Әт-Тәүүәәб»те духә намаҙынан һуң көн һайын 360 мәртәбә ҡ абатлағандарҙы иһә Аллаһы Тәғәлә тура юлға баҫтырыр, тәүбәгә килтерер.

**الْمُنْتَقِمُ — әл-Мүнтәҡыйм.**

(32:22), (43:41), (44:16)

***Гонаһлыларға яза Билгеләүсе, әммә Ул башта уларҙы киҫ әтә һәм был хаҡта хәбәр ебәрә.***

Кешеләрҙең эшләгән ғәйептәренә күрә төп-төгәл тейешлеһен биреүселер. Аллаһ тәүбә һәм үкенеү өсөн кешегә бик күп уңайлы фарсаттар бирер. Ҡол былар҅ҙың береһен дә ҡулланмаһа, һәм тыйылған юлда йөрөүен дауам итһә, Аллаһы Тәғәлә уға гонаһына тейешлеһен бирер. Бер аҙ ғына ла аҙайтмаҫ, бер аҙ ғына ла арттырмаҫ.

Кәмһетеүҙәргә, түбәнһетеүҙәргә дусар ителеп, уларға ҡаршы торорға үҙендә көс тапмаған кешегә әлеге гүзәл исемде бер-бер артлы өс йомала уҡырға кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк еңер.

**الْعَفُوُّ — әл-Ғәфүү.**

(4:99), (4:149), (22:60)

***Ярлыҡаусы.***

Бик ғәфү итеүсе тимәктер. Аллаһ, үс алған кеүек, ғәфү ҙә итер. Шуның өсөн әҙәм балаһы, гонаһтарынан һәр ваҡыт тәүбә итеп, Аллаһы Тәғәләнең ғәфү итеүен теләр. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғәйшә инәбеҙгә (раҙыяллаһу ғәнһә) бер Ҡәҙер кисендә: ***"Аллам, Һин ғәфү итеүсеһең, ғәфү итеүҙе һөйәһең, мине ғәфү ит",***— тип доға ҡылырға өйрәткән.

**الرَّؤُفُ — әр-Рауф.**

(2:143), (2:207), (3:30), (9:117), (24:20), (57:9), (59:10)

***Мәрхәмәтле, тәүбәләрҙе Ҡабул ҡылыусы.***

Аллаһ бик мәрхәмәтлелер. Мәрхәмәтенең иге-сиге юҡ, бер үлсәме лә юҡтыр.

Күңелдәге асыуҙы, яуызлыҡты еңеү өсөн 10 мәртәбә салауат-дурудты (Саләтүлиб—рахимийә) йәки әттәхиәттең һуңғы өлөшөн уҡырға (ул түбәндәгесә яҙыла: ***«Аллааһүммә салли ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибрааһимә үә ғәләә әәли Ибрааһим. Иннәкә хәмидүм мәжид. Аллааһүммә бәрик ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә бәрактә ғәләә Ибрааһимә үә ғәләә әәли Ибрааһим. Иннәкә хәмидүм мәжид»***), унан һуң 10 мәртәбә Аллаһы Тәғәләнең әлеге гүзәл исемен ҡабатларға кәрәк. Иншә Аллаһ, шунан күңел тыныслығы табырһығыҙ.

Бынан тыш «Әр-Рауф»те күп мәртәбәләр ҡабатлаған кешенең башкалар араһында дәрәжәһе артыр, уны хөрмәт итә башларҙар. Ҡырыҫ, талапсан етәксе менән һөйләшер, аңлашыр алдынан да был исемде ҡабатларға кәңәш ителә.

**مَالِكُ الْمُلْكِ — Мәәликүл-мүлки.**

***Күктәр һәм ер Батшаһы, Теләгәнен ҡылыусы, Ул хәл ҡ ылғанндарҙы бирәү ҙә урап, ситләп уҙа алмай.***

Һәр нәмәнең хужаһы, эйәһе — Улдыр. Беҙҙең үҙ малыбыҙ тип уйлаған нәмәләр асылда — Уныҡылыр. Теләгән ваҡытта ҡ улыбыҙҙан алыр. Беҙ Унының мөлкөндә йәшәйбеҙ. Беҙгә теләгән эште эшләр. Мөлкәттең мәңгелек хужаһы ла — Улдыр. Мал-мөлкәттең барыһы ла фаниҙыр (ваҡытлыса). Донъя тормошонда ваҡыт уҙҙырмаҫ өсөн генә булған бер саралыр. Әммә бик күп кешеләр, мал-мөлкәтте үҙҙәренең асыл маҡсаттары тип уйлап, унының артынан сабалар. Ләкин ул малдар, ул байлыҡтар хужаһының артынан йүгермәҫ, Әхирәттә хужаһына һис бер файҙ а килтермәҫ. Ул көндө файҙа бирәсәк берҙән-бер нәмә — сәләмәт ҡәлбтер, йәғни сәмими күңел.

Аллаһы Тәғәләнең әлеге гүзәл исемен даими ҡабатлағандарҙ ың мал-мөлкәте, бәйһеҙлеге артыр.

**ذُو الْجَلَالِ وَالْإِكْرَامِ — Ҙүл-жәләәли үәл-икраам.**

(55:27), (55:78)

***Бөйөклөк, камиллыҡ, хөрмәт Эйәһе.***

Бөйөклөк һәм ихтирам-йомартлыҡ хужаһы — бары тик Аллаһтыр. Унының ихтирамының сиге юҡтыр. Инсан Унының шул ихтирамы арҡаһында йәшәр.

Әлеге гүзәл исемде йыш ҡабатлаған кешене Аллаһ хөрмәт-ихтирам менән бүләкләр, бәйһеҙ итер.

**الْمُقْسِطُ — әл-Мүксит.**

***Ғәҙел, камил тәртиптәр Урынлаштырыусы.***

Аллаһ бөтөн эштәрен оҡшашлыҡ һәм оҡшатыу рәүешендә эшләр тимәктер. Унының эсендә тигеҙһеҙлек, кәмселек булмаҫ. Ха

ҡһыҙлык һәм золом кеүек хәрәкәттәр кешеләргә генә хастыр. Аллаһ уларҙан азаттыр.

Әлеге гүзәл исемде даими ҡабатлаған кеше шайтан ҡотҡоһона бирелмәҫ, һәр төрлө шик-шөбһәләрҙән азат булыр. Ә ниндәй ҙә булһа эш башлар алдынан уны 700 мәртәбә ҡабатларға кәрәк. Иншә Аллаһ, ахыры уңышлы тамамланыр.

**الْجَامِعُ — әл-Жәәмиғ.**

(3:9)

***Йыйыусы, Ҡийәмәт көнөндә бар мәхлүҡтәрен бергә Туплаусы.***

Теләгәнен теләгән ваҡытта, теләгән урында бергә туплаусы тимәктер. Таралған нәмәләрҙе йыйыу, беҙ кешеләр өсөн генә ауыр. Аллаһ иһә, үлеп туҙан хәленә килгән кешеләрҙе бер ниндәй ауырлыҡһыҙ туплаясаҡ.

Һуғыш, ер тетрәү, һыу баҫыу йәки башҡа фажиғәле хәлдәрҙә юғалтҡан туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе табыу, йәнә бергә йыйыу-туплау өсөн, духә намаҙы алдынан ғөсөл ҡойоноп, ҡулдарҙы өҫ кә күтәрергә һәм әлеге исемде 10 мәртәбә уҡырға кәңәш ителә. Исемде ҡабатлағанда бармаҡтарҙы бөгөп барырға. Мал йәки кем дә булһа хәбәрһеҙ юғалғанда түбәндәге доғаны уҡыйҙар: ***«Аллааһүммә йәә жәмиғүннәси лийәүмин лә райбә фииһи, ижмәғ даләәти».***

**الْغَنِيُّ — әл-Ғаний.**

(2:263), (3:97), (9:28), (35:15), (39:7), (47:38), (57:24)

***Байлыҡ Эйәһе, Уның бер нәрмәгә лә ихтыяжы юҡ, ләкин һәр бер йән эйәһе Уға мохтаж.***

Бик бай һәм һәр нәмәһе тәьмин ҡылынған берҙән-бер Барлыҡ — Аллаһтыр. Аллаһтан байыраҡ бер кемдә була алмаҫ. Уның бер нәмәгә лә ихтыяжы юҡ. Ләкин һәр нәмә Аллаһка мохтаждыр.

Әлеге исемде көн һайын 70 мәртәбә ҡабатлаған кешегә Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәт итер. Сир-сырхауҙан һауығыу өсөн иһә уны даими һәм күп мәртәбәләр ҡабатлап, ауыртҡан урынға өрөргә кәрәк.

**الْمُغْنِي — әл-Мүғни.**
(9:28)

***Киңлек Эйәһе, Ул теләгән кешеһенең байлығын арттыра.***

Аллаһ бай булған кеүек, теләгән ҡолдарын да бай итер. Мал һәм байлыҡ бирелгән кешеләрҙең бер төркөмө был малдарҙы Аллаһ юлында сарыф иткәндә ҡайһы берҙәре был малдың бөтөнөһөн Аллаһ хупламаған юлда сарыф итәләр. Шулай ҙа Аллаһ уларға мөлкәт биреүҙе дауам итер. Бының сәбәбен, хикмәтен Аллаһ Үҙе генә белә.

Матди һәм рухи байлыҡҡа ирешергә теләгән кешегә әлеге исемде салауат-дурудка тиклем һәм унан һуң 1111 мәртәбә ҡ абатлау зарур. Салауат-дуруд үҙе 11 мәртәбә уҡыла.

**الْمَانِعُ — әл-Мәәниғ.**

***Ҡаршы сығыусы, тотҡарлаусы тимәктер.***

Берәй нәмәнең майҙанға килеүенә ҡайһы бер ваҡыттарҙа Ул кәртә ҡуйыр. Был каршылыҡ кире мәғәнәне аңлатмай. Ул майҙ анға килә торған хаталарҙы тоткарлар. Шундай вакиғалар ҙа була, уларҙың хәйерле булыуын бары тик йылдар уҙғас ҡына аңларға мөмкин. Ләкин беҙ был осракта эшебеҙ барып сыкманы тип кайғырабыҙ.

**الضَّارُّ — әд-Даарр, النَّافِعُ — эн-Нәәфиғ.**

***Һынауҙар ебәреүсе, икенсеһе - Мәрхәмәт итеүсе, бәрәкәт Килтереүсе.***

Беренсе исем зарар биргән нәмәләрҙе яратыусы, икенсеһе иһә файҙалы нәмәләрҙе яратыусы тимәктер. Һәр нәмәнең яратыусыһы — Ул булғанға күрә, быларҙың да яратыусыһы — Улдыр. Ҡол: "Зарарлы нәмәләрҙе Аллаһ яралтҡан, минең ни ғәйебем бар?"— тип әйтә алмаҫ. Ҡол ирадәһен (иркен, мөмкинселеген) изге юлда ҡулланырға тейеш.

Әд-Даарр исемен йомаға ҡаршы төндә 100 мәртәбә ҡабатлаған кешегә рухи һәм физик зыян һалынмаҫ. Уны даими уҡыу тәк үәлекте арттыра, Аллаһы Тәғәләгә яҡынайта.

Ән-Нәәфиғ исемен берәй транспорт сараһына ултырғанда уҡ ырға кәңәш ителә. Ул төрлө бәлә-казаларҙан һаҡлай, сәфәрҙе уңышлы итә. Эш башлар алдынан иһә уны 41 мәртәбә ҡ абатларға кәрәк — маҡсатыңа тиҙ ирешерһең. Балаға уҙыр алдынан ҡабатлаһаң, донъяға изге бала ауаз һалыр.

**النُّورُ — эн-Нуур.**

(24:35)

***Нур индереүсе, Яҡтыртыуы.***

Ғәләмдәрҙе нурландырыусы, күңелдәргә һидәйәт утын яғыусы — Улдыр. Аллаһ күктәрҙең һәм ерҙең Нурылыр.

Әлеге гүзәл исемде «Нур» сүрәһенән һуң 1001 йәки көн һайын ике рәкәғәт сөннәт намаҙы уҡығандан һуң 7 мәртәбә ҡ абатлаһаң, урланған йәки юғалған малыңдың ҡайҙалығын төшөңдә күрерһең.

**الْهَادِى — әл-Һәәди.**

(25:31)

***Тура юлға күндереүсе.***

Теләгән ҡолона һидәйәт (тура юл) биреп, тура юлға күндереүсе мәғәнәһендәлер. Аллаһ, яҡшы һәм насарҙы яралтыу менән бергә, кешенең насар юлдан китеүен теләмәç. Мосолман намаҙының һәр рәкәғәтендә: *"Аллам! Беҙҙе тура юлға күндер",*— тип доға ҡылыр.

Әлеге исемдә, доға ҡылғандағы кеүек ҡулдарҙы өçкә күтәреп, бер-нисә мәртәбә ҡабатларға кәрәк. Аллаһ ундайҙарҙың тәк үәлеген, дини ғилемен арттырыр, иманын нығытыр, тура юлға күндерер.

**الْبَدِيعُ — әл-Бәдииғ.**

(2:117), (6:101)

***Зирәк, Уға асылы буйынса, бойороҡтары һәм ҡарарҙары буйынса ла тиңдәр юҡ.***

Ғәләмде иң гүзәл үә оҡшашы булмаған рәүештә яратҡандыр. Аллаһтың яралтыусы мәғәнәһендәге исемдәренең береһелер. Был исемдәр араһында бер төркөм мәғәнә айырмалары барҙыр.

Дүртенсе һәм бишенсе, йәғни мәғриб (аҡшам) һәм ғишә (йәстү) намаҙҙары араһында 1000 мәртәбә ***«Йәә Бәдиғү сәмәүәти үәл-әрд»*** тип ҡабатлаган кешене ҡайғы-хәсрәттәр урап уҙыр, ул Әхирәткә Хаҡ диндә күсер, иншә Аллаһ.

Ниндәй ҙә булһа эшкә алыныр алдынан һәм уның ахыры ни менән бөтөрөн белмәгән осракта «Әл-Бәдииғ»ты йоҡоға китер алдынан күп мәртәбәләр ҡабатларға кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, шул төндә күргән төшөгөҙҙә һорауығыҙға яуапты табырһығыҙ.

**الْبَاقِى — әл-Бәәҡый.**

(6:101), (55:27)

***Ул — Мәңгелек.***

Һуңғы, ахыры булмаған барлык тимәктер. Аллаһтың башланғысы ла, аҙағы ла юк. Һәр нәмә юк буласак. Ләкин Ул бар, бар булыуын дауам итәсәктер.

Әлеге гүзәл исемде йомаға каршы төндә 1000 мәртәбә к абатлаған кешене бәлә-казалар урап уҙыр, уның изге ғәмәлдәрен Аллаһы Тәғәлә кабул итер.

**الْوَارِثُ — әл-Үәәриҫ.**
(15:23)

***Бар йыһан Уның кулында, Ул — уның Уариҫы, Ул — Мәңгелек, йән эйәләренең бар байлығы мираҫ булып Уға кала.***

Мал-мөлкәт һәм байлыктың ысын хужаһы Аллаһ тимәктер. Кешеләрҙең дә байлыктары бар, ләкин улар байлыктарына ысын мәғәнәлә хужа була алмаҫтар. Әжәл килгән вакытта байлыктың бер файҙаһы ла булмаҫ. Уларҙың хакикый эйәһе — Аллаһтыр. Уның иһә уларға һис ихтыяжы юк.

Әлеге гүзәл исемде таң алдынан 100 мәртәбә кабатлаған кешене Аллаһы Тәғәлә үҙ канаты аҫтына ала, мохтажлыктан, фә кирлектән, кайғы-хәсрәт килеүҙән һаклай. Борсоу-мәшәкәттәрҙ ән арыныу өсөн иһә уны күп мәртәбәләр кабатларға кәрәк.

**الرَّشِيدُ — әр-Рашиид.**
(11:87)

***Тура юлға күндереүсе.***

Ғәләмде бер мизән, тәртип буйынса йөрөтөүсе тимәктер. Һәр эште идара иткән, йүнәлткән, күҙәткән — Улдыр. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе был эштә сара буларак кына куллана.

Максатына, ирешеү юлдарын таба, эштең асылына төшөнә алмағанда Аллаһы Тәғәләнең әлеге гүзәл исемен мәғриб (акшам) һәм ғишә (йәстү) намаҙҙары араһында 1000 мәртәбә укырға

кәңәш ителә. Иншә Аллаһ, был төндә күргән төшөгөҙ барыһына асыҡлыҡ индерер.

**الصَّبُورُ — әс-Сабуур.**
(8:46)

***Сабыр, Уның түҙемлелеге һәм сабырлығы сикһеҙ.***

Аллаһ бик сабырҙыр. Гонаһлыларға, залимдарға, баш тартыусыларға яза бирергә ашыҡмаҫ, уларға ваҡыт бирер. Был ваҡыт эсендә тәүбә итһәләр — уларҙы ғәфү итер, ғәфү итеүҙе яратыр. Тәүбә итмәһәләр — бер көндө яза ҡылыр. Беҙ кешеләр Уның хикмәттәрен аңламағанға күрә, Аллаһ быларға ниңә яза бирһен, тип уйлайбыҙ. Сөнки, Ул һәр нәмәне белә һәм күрә.

Әлеге гүзәл исемде таң алдыннан 100 мәртәбә ҡабатлағандар яңы тыуған көн дауамында бәлә-ҡазаларға юлыҡмаҫтар, дошмандары ла уларға зыян һала алмаҫ, иншә Аллаһ.. Ниндәй ҙә булһа мәсьәләне хәл иткәндә ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, «Әс-Сабур» исемен 1020 мәртәбә ҡабатларға кәрәк.

## Исми Әғҙам доғаһы

**Бисмилләһир-рахмәәнир-рахиим**

Йәә Жәмиилү йәә Аллаһ
йәә Ҡариибү йәә Аллаһ
йәә Мүжибү йәә Аллаһ
йәә Нәжибү йәә Аллаһ
йәә Хәбиибү йәә Аллаһ
йәә Раззәку йәә Аллаһ
йәә Мәғрүфү йәә Аллаһ
йәә Ғәҙыймү йәә Аллаһ

йәә Ләтыйфү йәә Аллаһ
йәә Хәннәнү йәә Аллаһ
йәә Мәннәнү йәә Аллаһ
йәә Дәййәнү йәә Аллаһ
йәә Султану йәә Аллаһ
йәә Сүбехәнү йәә Аллаһ
йәә Мүстәғәнү йәә Аллаһ
йәә Мүхсину йәә Аллаһ
йәә Рахмәнү йәә Аллаһ
йәә Рахииму йәә Аллаһ
йәә Кәриму йәә Аллаһ
йәә Мүжиду йәә Аллаһ
йәә Хәмиду йәә Аллаһ
йәә Хәкииму йәә Аллалы
йәә Мүҡтәдиру йәә Аллаһ
йәә Ғәлиму йәә Аллаһ
йәә Ғафүрү йәә Аллаһ
йәә Ғаффәрү йәә Аллаһ
йәә Мүбдиийү йәә Аллаһ
йәә Ҡадииру йәә Аллаһ
йәә Мүғииду йәә Аллаһ
йәә Ҡадииму йәә Аллаһ
йәә Рафиғү йәә Аллаһ
йәә Шәкуру йәә Аллаһ
йәә Сабиру йәә Аллаһ
йәә Басыйру йәә Аллаһ
йәә Сәмиғү йәә Аллаһ
йәә Әүүәлү йәә Аллаһ
йәә Әхыйру йәә Аллаһ
йәә Ҙааһиру йәә Аллаһ
йәә Бәәтыйнү йәә Аллаһ
йәә Үәкиилү йәә Аллаһ

йәә Ҡуддүсү йәә Аллаһ
йәә Сәләму йәә Аллаһ
йәә Мүъмину йәә Аллаһ
йәә Мүһәймину йәә Аллаһ
йәә Ғәзиизү йәә Аллаһ
йәә Жәббәрү йәә Аллаһ
йәә Халииҡу йәә Аллаһ
йәә Бәриййү йәә Алла
йәә Ғәлләмү йәә Аллаһ
йәә Ғәлииму йәә Аллаһ
йәә Хәййү йәә Аллаһ
йәә Ҡаййүмү йәә Аллаһ
йәә Ҡаабиду йәә Аллаһ
йәә Бәәситү йәә Аллаһ
йәә Мүғиззү йәә Аллаһ
йәә Мүҙиллү йәә Аллаһ
йәә Ҡаүиийү йәә Аллаһ
йәә Мүғиду йәә Аллаһ
йәә Мәәниғү йәә Аллаһ
йәә Хәфиҙү йәә Аллаһ
йәә Дәәфиғү йәә Аллаһ
йәә Кәфиилү йәә Аллаһ
йәә Жәлиилү йәә Аллаһ
йәә Җәмилү йәә Аллаһ
йәә Ҙәл жәләәли үәл Икрами йәә Аллаһ
йәә Кәмәәлү йәә Аллаһ
йәә Мүжиибәд-дәғүәәти йәә Аллаһ
йәә Мүнзиләл-бәракәти йәә Аллаһ
йәә Мүхиййәс-сәйәәәти йәә Аллаһ
йәә  Рафиғәд-дәражәәти  йәә Аллаһ
йәә Ҡауиййү йәә Аллаһ

йәә Мүфәттихәл-әбүәәби йәә Аллаһ
йәә Кәфил-хәсәнәәти йәә Аллаһ
йәә Дәәъимү йәә Аллаһ
йәә Фәрдү йәә Аллаһ
йәә Витру йәә Аллаһ
йәә Әхәдү йәә Аллаһ
йәә Самәдү йәә Аллаһ
йәә Мәхмүдү йәә Аллаһ
йәә Саадиҡаль-үәғди йәә Аллаһ
йәә Ҡәлииййү йәә Аллаһ
йәә Шәифү йәә Аллаһ
йәә Кәәфи йәә Аллаһ
йәә Ғәәиифу йәә Аллаһ
йәә Мүстәғәәнү йәә Аллаһ
йәә Мүтәғәәли йәә Аллаһ
йәә Һәәди йәә Аллаһ
йәә Ҡаадиру йәә Аллаһ
йәә Фәәһиру йәә Аллаһ
йәә Ҙааһирү йәә Аллаһ
йәә Ҡаһһәру йәә Аллаһ
йәә Фәттәхү йәә Аллаһ
йәә Мүһәйминү йәә Аллаһ
йәә Раббәс-сәмәүәти үәл әрдый йәә Аллаһ
йәә Мәәликәл Мүлки йәә Аллаһ

Аллаһүммә инннии әсъәлүкә бихаҡҡый һәәҙиһил әсмәәәәъи күллиһәә ән түсаллийә ғәләә Мүхәммәдиү үә ғәләәәә әәли Мүхәммәдиү үәрхәм Мүхәммәдән үә әәли Мүхәммүдин кәмәә салләәйтә үәсәлләмтә үә бәәрактә ғәләә Ибрааһимә үә ғәләә әәли Ибрааһимә фил ғәәләмин. Раббәнәә иннәкә хәмиидүм мәжиид.

Бирахмәтикә йәәәә әрхәмәр-рахимин. *Әмин.*